«Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)»
йәмәғәт ойошмалары
халыҡ-ара берлегенең
Башҡарма комитеты тарафынан
**РАҪЛАНДЫ**
2020 йылдың 25 декабре

_____________ / Ғ.М. Яҡупов

# 2021-2031 ЙЫЛДАРҒА
# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ҮҪЕШ СТРАТЕГИЯҺЫ

**2020 йыл**

## Инеш

Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы (артабан – Стратегия) – этностың киләсәктә тотороҡло һәм уңышлы үҫешен тәьмин итеү өсөн заманса маҡсаттар, бурыстар, принциптар, йүнәлештәр һәм механизмдар йыйылмаһы. Стратегия комплекслы социаль-йүнәлешле характерға эйә һәм башҡорт халҡының ҡеүәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән.

Стратегияла дәүләт сәйәсәтенең төп объекттары – милләт-ара процестарҙы анализлау һәм ошо мөнәсәбәттәргә етди йоғонто яһаған факторҙар системаһы. Был сәйәсәттең төп бурыстары:

- башҡорт халҡын берләштереү;
- башҡорт халҡының тотороҡло һәм гармониялы үҫеше;
- башҡорт халҡының һәм республикала йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың этномәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн ҡулай шарттар булдырыу;
- ошолар нигеҙендә йәмәғәт тотороҡлолоғон һәм милләт-ара тыныслыҡты тәьмин итеү.

Дәүләт мәнфәғәтен, дөйөм кешелек өҫтөнлөктәрен иҫәпкә алып, халыҡтың этномәҙәни үҙенсәлеген һаҡлап, дөйөм дәүләт проекттарының һәм башҡорттарҙың, Башҡортостан Республикаһының башҡа халыҡтары ихтыяждарының гармониялы берләшеүен тормошҡа ашырыу, граждандарҙың конституцион хоҡуҡтарын һәм азатлығын тәьмин итеү Стратегияның төп маҡсаты булып тора.

Стратегия Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының төрлө яҡлы хеҙмәттәшлеген әүҙемләштереүгә, уларҙың милли телдәрен һәм мәҙәниәтен үҫтереүгә йүнәлтелгән.

Был стратегия түбәндәге федераль норматив акттарға:

- Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына;
- Рәсәй Федерацияһының 1991 йылдың 25 октябрендәге 1807-1 һанлы «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» (2020 йылдың 31 июле редакцияһында),
- 1995 йылдың 19 майындағы 82-се һанлы «Йәмәғәт ойошмалары тураһында» (2019 йылдың 13 декабре редакцияһында),
- 1996 йылдың 12 ғинуарындағы 7-се һанлы «Коммерцияға ҡарамаған ойошмалар тураһында» (2020 йылдың 15 сентябрендәге редакцияһында),
- 1996 йылдың 17 июнендәге 174-се һанлы «Милли-мәҙәни автономия тураһында» (2014 йылдың 4 ноябрендәге редакцияһында),
- 1999 йылдың 24 майындағы 99-сы һанлы «Рәсәй Федерацияһының сит илдәрҙәге ватандаштарыбыҙға ҡарата дәүләт сәйәсәте тураһында» (2013 йылдың 27 июлендәге редакцияһында),
- 2002 йылдың 25 июлендәге 114-се һанлы «Экстремистик эшмәкәрлеккә ҡаршы эш итеү тураһында» (2020 йылдың 31 июлендәге редакцияһында) федераль закондарына;

- Рәсәй Федерацияһы Президентының Указы менән 2012 йылдың 19 декабрендә раҫланған 1666-сы һанлы «Рәсәй Федерацияһының 2025 йылға тиклем дәүләт милли сәйәсәте стратегияһы тураһында» Рәсәй Федерацияһының 2025 йылға тиклем дәүләт милли стратегияһына;
- Рәсәй Федерацияһы Президенты Д. Медведев Указы менән 2009 йылдың 5 октябрендә раҫланған «Рәсәй Федерацияһында терроризмға ҡаршы эш итеү концепцияһы»на;
- Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советы Президиумының 2011 йылдың 11 декабрендә үткән, Рәсәй йәмғиәтендә милләт-ара татыулыҡ мәсьәләләренә арналған ултырышы (Өфө) материалдарына һәм уның йомғаҡлау документтарына нигеҙләнә.

Федераль ҡануниәт нигеҙендә республикала уның халыҡтарының этномилли үҫешен дәүләт гарантиялары менән тәьмин итеү мөмкинлеге биргән хоҡуҡи база булдырылған. Был база нигеҙен Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында», «Мәҙәниәт тураһында», «Башҡортостан Республикаһында йыйылыштар, демонстрациялар һәм башҡа халыҡ йыйылған саралар азатлығы тураһында», «Башҡортостан Республикаһында йәмәғәт берекмәләре тураһында», «Китапхана эше тураһында», «Башҡортостан Республикаһында граждандарҙың милли-мәҙәни берекмәләре тураһында», «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында», «Халыҡ художество кәсептәре тураһында», «Башҡортостан Республикаһында киң мәғлүмәт сараларына һәм китап нәшер итеүгә дәүләт ярҙамы тураһында» закондары, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Указдары тәшкил итә.

Стратегия дәүләт (милли) именлеге, оҙайлы социаль-иҡтисади үҫеш, төбәк, тышҡы, миграция һәм йәштәр сәйәсәте, мәғариф һәм мәҙәниәт, Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт милли сәйәсәте өлкәһенә ҡағылған башҡа документтарҙы, шулай уҡ Рәсәй Федерацияһы Президентының Указы менән 2012 йылдың 19 декабрендә раҫланған 1666-сы һанлы «Рәсәй Федерацияһының 2025 йылға тиклем дәүләт милли сәйәсәте стратегияһы тураһында» Рәсәй Федерацияһының 2025 йылға тиклем дәүләт милли концепцияһының төп положениеларының күсәгилешлеген иҫәпкә алып эшләнгән.

Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын ғәмәлгә ашырыуҙа дәүләт һәм муниципаль органдарҙың ярҙамы талап ителгән төп аспекттар:

- Башҡортостан Республикаһында, башҡорттар күпләп йәшәгән Рәсәй төбәктәрендә башҡорт халҡының телен, мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү, уларҙың рухи уртаҡлығын нығытыу;
- сит илдәрҙә йәшәгән башҡорттарға милли мәҙәниәтте үҫтереүгә һәм уларҙың туған телде өйрәнеүенә, Рәсәй һәм, шул иҫәптән, Башҡортостан Республикаһы менән бәйләнештәрен нығытыуына ярҙам итеү.

Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырыу башҡорттарҙың төрлө демографик һәм социаль төркөмдәренең ҡыҙыҡһыныуын һәм ихтыяжын иҫәпкә алып, башҡорт халҡы алдында торған проблемаларҙы, ысынбарлыҡтағы хәле һәм үҫеш перспективалары мәсьәләләрен хәл иткәндә яңы ҡараш ҡулланыуҙы талап итә.

Стратегияны тормошҡа ашырыу Рәсәй Федерацияһының дәүләт һәм муниципаль власть органдары тарафынан, шулай уҡ төрлө сәйәси һәм йәмәғәт көстәре яғынан дәүләт милли сәйәсәте контексында башҡорт халҡын үҫтереү мәсьәләрен хәл итеүҙә ижади ҡараш тыуҙырыуға булышлыҡ итергә тейеш.

# I. Башҡорттар.
# Тарихы, традициялары, хәҙерге торошо

Башҡорт халҡы Төньяҡ Евразияла көн итеүсе бик күп халыҡтарҙың аралашып йәшәүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән һәм үҙендә мәҙәниәттәр күп төрлөлөгөн туплаған. Урал тауҙары башҡорт халҡының милли менталитетының һәм фәлсәфәһенең айырылғыһыҙ өлөшө. «Урал» атамаһы төп башҡорт һүҙе һәм халыҡтың рухи мираҫында ныҡлы урын алған. Башҡорт халҡының тыуған ил, донъяла башҡорт милләте барлыҡҡа килгән һәм үҫешкән төп урын булараҡ Уралға бәйлелеге эпос һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙә асыҡ сағыла. Уларҙың иң билдәлеһе – башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүен һәм менталитетын тасуирлаған «Урал батыр» эпосы.

Башҡорт халҡының этногенезы бөгөн Тарихи Башҡортостан (Башҡорт иле, Оло Башҡортостан) тип аталған ҙур биләмәлә бара. Көньяҡта ул Урал (Яйыҡ) йылғаһының урта ағышы менән сикләнһә, көнсығышта Тобол буйы менән, төньяҡта – Чус йылғаһы, көнбайышта – Зәй һәм Минзәлә йылғалары бассейнына тиклем йәйелә.

Матди яҡтан ҡарағанда, башҡорт мәҙәниәте Урал-Волга буйы археология мәҙәниәттәре – Кушнаренко-Ҡара Яҡуп комплексы, Сейәлек һәм Һәләүек археология комплекстары һәм башҡа ҡомартҡыларҙа сағылыш тапҡан. Өфө йылғаһы тамағында урынлашҡан урта быуат ҡаласығы тарихи Башҡортостан үҙәге тип билдәләнгән. Бөгөн ул археологтарға «Өфө-II» комплексы (Башҡорт ҡалаһы, Имән-кала, Тура-тау, Шәһр-и Тура) булараҡ таныш. Этнография буйынса башҡорттар төп 4 төркөмгә бүленә: төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш, көньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ-көнбайыш башҡорттары.

Тел йәһәтенән ҡарағанда, башҡорттарҙың телендә 3 диалект формалашҡан (көньяҡ, көнсығыш һәм төньяҡ-көнбайыш). Борондан башҡорттар әҙәби төрки теленең төбәк варианты — Урал-Волга буйы төрки (иҫке башҡорт) теле менән файҙаланған. Хәҙерге әҙәби башҡорт теле Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып тора.

Башҡорт халҡының этномәҙәни үҙенсәлегенең төп һыҙаты – борондан һаҡланып килгән ырыуҙарға бүленеү системаһы. Был ҡоролош башҡорт мәҙәниәтенең тарихи яҡтан ныҡынған элементы булып тора, ул заманында уғыҙ-бәшнәк, фин-уғыр, болғар, ҡыпсаҡ, нуғай һәм башҡа этник төркөмдәрҙең башҡорт этносына берләшеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә.

Башҡорттар өсөн ислам традицион дин булып тора, заманында ул халыҡтың төп әхлаҡи һәм рухи принциптары формалашыуына ҙур йоғонто яһай.

Конструктив милләт-ара бәйләнештең тарихи тәжрибәһе Башҡортостан халыҡтарын рухи яҡтан берләштереүсе мөһим фактор булып тора. Башҡорт халҡының мөһим үҙенсәлеге – бөгөн республика территорияһында йәшәүсе рус, татар, сыуаш, мари, мордва, удмурт һәм башҡа халыҡтарға ҡарата милли түҙмәүсәнлектең булмауы, толерантлыҡ кимәленең юғарылығы. Башҡортостан һәм

дөйөм Рәсәй халыҡтарын үҙ иректәре һәм хоҡуҡтары өсөн көрәшкә әйҙәгән милли герой Салауат Юлаевтың Башҡортостан Республикаһы гербында урын алған образы ла шулай уҡ ошо ерлектә тарихи яҡтан нығынған милләт-ара теләктәшлек һәм берҙәмлек тәжрибәһен сағылдыра.

Башҡорт халҡы Рәсәй Федерацияһының бөгөнгө күп милләтле халҡы формалашыуында прецедентлы мөһим роль уйнай. Был роль Рәсәй үҫешенең барлыҡ тарихи этаптарында: XVI быуатта күп халыҡлы берҙәм Рус дәүләте ойошоуҙа, XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдары һәм 1773-75 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышы осоронда, XVIII-XIX быуаттарҙа Рус дәүләтенең Рәсәй империяһы булып китеүендә, СССР барлыҡҡа килеүҙә һәм Рәсәй Федерацияһы ойошторолоуҙа ла сағыла.

XVI быуаттың икенсе яртыһында башҡорттарҙың үҙ ирке менән Рус дәүләте составына инеүе ғәмәлдә Рәсәй цивилизация-дәүләте барлыҡҡа килеү тарихын асып ебәрә. Рус батшаһы Иван IV башҡорттарҙың ергә аҫабалыҡ хоҡуғын таный, традицион үҙидара системаһын шул килеш ҡалдыра. Башҡорттар, үҙ сиратында, аҫаба ерҙәре өсөн яһаҡ түләү һәм үҙ иҫәбенә хәрби ғәскәр ойоштороп дәүләт сиктәрен (шул уҡ ваҡытта тарихи Башҡортостан сиктәрен дә) һаҡлау, Рус дәүләте алып барған һуғыштарҙа ҡатнашыу йөкләмәһен ала. Шулай итеп, был берләшеү тиңлек нигеҙендә тормошҡа ашырыла һәм ике яҡ өсөн дә файҙалы була.

Башҡорттарҙың Рус дәүләте составына инеүе XVI быуат аҙағынан рус, һуңғараҡ, XVII быуаттың икенсе яртыһынан, башҡорт ерҙәренә килеп ултырған башҡа халыҡтар вәкилдәре менән диалог һәм хеҙмәттәшлек мөхите булдырыу өсөн нигеҙ булып тора. Башҡорт һәм рус халыҡтарының аралышыуы тарихи Башҡортостан территорияһында мәҙәниәт-ара һәм халыҡ-ара бәйләнештәр барлыҡҡа килеүенә нигеҙ һала, төрлө халыҡтарҙың мәҙәни күп төрлөлөгөн һәм рухи уртаҡлығын тәьмин итә. Башҡорттарҙың башҡа халыҡтар менән үҙ-ара килешеп йәшәү традицияһы ғәҙеллеккә, Рәсәй халыҡтарының үҙенә генә хас ғөрөф-ғәҙәттәрен ихтирам итеүгә һәм уларҙың иң яҡшы ҡаҙаныштарын берләштерә алыу һәләтенә нигеҙләнә.

XVII - XVIII быуаттарҙа башҡорттар күп һанлы ихтилалдар ойоштороп, ғәмәлдә үҙҙәренең дә, башҡа халыҡтарҙың да хоҡуҡтарын яҡлай. Шуны билдәләп китергә кәрәк, ул ваҡытта башҡорттар аҫаба ерҙәрен, урындағы традицион үҙидара системаһын һәм үҙ динен һаҡлап ҡалыу өсөн көрәш алып бара. Шуның менән яңы Евразия тибындағы Рәсәй дәүләте барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ ителә. Был типтың формалашыуында XVI быуат аҙағынан башҡорт атлы полктарының Рәсәйҙең барлыҡ һуғыштарында ла ҡатнашыуы шулай уҡ ҙур роль уйнай, Рәсәй халыҡтары берҙәмлеген үҫтереү һәм нығытыуҙың мөһим факторы була. Халыҡ хәтерендә Башҡорт-мишәр ғәскәренең (22 башҡорт, 2 мишәр һәм 2 типтәр полкы) Рәсәй армияһы составында 1812 йылғы Ватан һуғышында, 1813-1814 йылдарҙа Наполеонға ҡаршы азат итеү походтарында ҡатнашыуы айырыуса уйылып ҡалған. Былар барыһы ла башҡорт һуғышсыларының илдең оборона һәләтен нығытыуға ҙур

өлөш индереүен күрһәтә, сөнки улар хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашҡан милли ғәскәрҙәр араһында иң күп һанлыһы була.

Мәғрифәтселек дәүерендә башҡорт халҡы араһынан сыҡҡан Мифтахетдин Аҡмулла, Зәйнулла Рәсүлев, Морат Рәмзи, Ризаитдин Фәхретдин, Тажетдин Ялсығол һ.б. кеүек бик күп мәғрифәтселәр билдәлелек яулай.

Башҡортостан – Рәсәй составында ойошторолған беренсе милли республика, уның тарихы һәм статусы Рәсәйҙең быуаттар тәжрибәһе нигеҙендә барлыҡҡа килгән “күп төрлөлөктә берҙәмлек” системаһы өлгөһөн кәүҙәләндерә. 1917-1922 йылдарҙағы бик ауыр һәм ҡатмарлы шарттарҙа ойошторолған Башҡортостан милли-территориаль автономияһы СССР-ҙа башҡорттарҙың һәм республикалағы башҡа халыҡтарҙың яңы дөйөм гражданлыҡ үҙенсәлеген булдырыусы һәм нығытыусы институт була. 1917 йылғы революцияларҙан һуң Башҡортостан өлгөһө буйынса милли-территориаль автономияларҙы таныу тарҡалып барған ил халҡын яңы совет гражданлығы үҙенсәлеге нигеҙендә, Рәсәй-Евразия цивилизацияһы тарихи үҫешен дауам итеүсе ҡеүәтле дәүләткә берләштереү мөмкинлеген бирә. Шул уҡ ваҡытта, етди тетрәнеүҙәр ваҡыты булған 1917 йылғы революциялар һәм Граждандар һуғышы осоро башҡорт халҡының генофондында һиҙелерлек эҙ ҡалдыра.

БАССР осоро башҡорт халҡын “башҡорт совет социалистик милләте” кимәленә тиклем интенсив яңыртыу осоро була. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында СССР сиктәрен һаҡлағанда илһөйәрлек һәм оборона аңын формалаштырыуҙа башҡорт халҡы вәкилдәре индергән өлөштөң әһәмиәтен дә билдәләп үтергә кәрәк. СССР хәрби берләшмәләре араһында уникаль күренеш булған, 78 яугирына Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән 112-се (16-сы) Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙарының ҡаһарманлығы үлемһеҙлек яуланы. Башҡортостан геройҙары Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов), Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин, Миңлеғәли Шайморатов, Муса Гәрәев һәм башҡа бик күптәрҙең батырлығы киң танылыу ала.

Советтар союзы тарҡалғандан һуңғы осор Рәсәй Федерацияһының территориаль һәм мәҙәни бөтөнлөгөн һаҡлауҙа Башҡортостан Республикаһының потенциалын күрһәтте. XX быуат һуңында – XXI быуат башында баҙар иҡтисады шарттарында башҡорт халҡының иҡтисади үҫешенә, мәктәптәрҙә туған телдәрҙә белем биреү, милли мәҙәниәтте, әҙәбиәтте, сәнғәтте, киң мәғлүмәт сараларын үҫтереү буйынса программалар индереп, комплекслы этномәҙәни үҫеште тормошҡа ашырыуға дәүләт ярҙамы күрһәтеү буйынса тотош саралар системаһы булдырылды.

**Башҡорттарҙың хәҙерге торошо**

2020 йылға башҡорттарҙың донъяла дөйөм һаны 1,7 миллион кеше тәшкил итә. Башҡорттар – Рәсәй Федерацияһының иң ҙур республикаларының береһе булған Башҡортостан Республикаһының һәм күрше төбәктәрҙең ерле халҡы. 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса республиканың дөйөм халҡы 4 миллион кеше булһа, башҡорттар – 1 172 287 кеше тәшкил итә. Башҡорттарҙың күп

кенә өлөшө – 400 меңдән ашыу кеше – Рәсәй Федерацияһы субъекттарында йәшәй. Башҡортостан Республикаһынан ситтә башҡорттар күрше төбәктәрҙә: Силәбе, Ырымбур, Свердловск, Һамар, Һарытау өлкәләрендә, Пермь крайында, Татарстан Республикаһының көнсығыш районларында тупланған.

Башҡортостан Республикаһы – Рәсәй Федерацияһының ҡеүәтле иҡтисади һәм социаль-мәҙәни потенциалға эйә булған эре төбәге (ил халҡының 2,8 проценты йәшәй, Волга буйы федераль округында халыҡ һаны буйынса - беренсе, ил буйынса етенсе урында). Башҡортостан Республикаһы – Рәсәй Федерацияһының күп милләтле субъекттарының береһе, 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса унда 118 милләт һәм уларға ингән 12 этник төркөм йәшәй. Һан буйынса иң күбе һәм үҙ-ара бәйләнештә күп быуатлыҡ тарихлы социаль-иҡтисади мөнәсәбәттәргә өс халыҡ йоғонто яһай:

- башҡорттар (29,5 %),
- рустар (36,1 %)
- татарҙар (25,4 %)

Бынан тыш, республикала сыуаш, мари, удмурт, мордва, шулай уҡ белорус, украин, немец, латыш, йәһүд этник берлектәренең ойошоп йәшәүен билдәләргә кәрәк. Һуңғы ваҡытта яҡындағы (Кавказ, Урта Азия) һәм алыҫтағы (Вьетнам, Афған, Ҡытай) сит илдәрҙән, шулай уҡ Рәсәйҙәң яҡын төбәктәренән миграция ағымы үҫә.

Башҡортостан Республикаһы халҡының күпселеге ҡалаларҙа (2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса – 60,5 процент) йәшәй, төбәктә миллионлы мегаполис – Өфө ҡалаһы бар. Аныҡ этник үҙбилдәләнешкә эйә ауыл халҡы өлөшө Рәсәйҙә иң юғары күрһәткес – 39,5 процент тәшкил итә.

Башҡорттарҙың урбанизацияланыуы Рәсәй Федерацияһы буйынса 46,23 процент, Башҡортостан Республикаһы буйынса 40,67 процент тәшкил итә. Әгәр XX быуаттың икенсе яртыһында этнос составында ҡала башҡорттарының өлөшө артһа, XXI быуат башында уның бер ни тиклем тотороҡланыуы күҙәтелә.

XX быуат дауамында башҡорттарҙың һаны бер ни тиклем арта бара. Үткәрелгән һәр халыҡ иҫәбен алыу Рәсәйҙә башҡорттарҙың һаны күбәйеүен теркәй. Уртаса алғанда, иҫәп алыу араһында этнос һаны 100 мең самаһы кешегә арта. Әммә 2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре беренсе тапҡыр этнос һаны кәмеүен (Рәсәй буйынса дөйөм алғанда 88 мең кешегә) күрһәтте.

Башҡорт этносы мөхитендә демографик процестарға түбәндәге ҡайһы бер факторҙар йоғонто яһай:

1) административ – башҡорттар йәшәгән тарихи биләмә административ-территориаль ҡоролош үткәреү һөҙөмтәһендә төрлө республикалар һәм өлкәләргә бүленә;
2) этномәҙәни, этнолингвистик – этностың этник үҙаҡы структураһы һәм телендәге үҙгәрештәр;

3) демографик – халыҡтың тәбиғи ишәйеүе һәм миграция процестары;
4) халыҡтың статистика иҫәбен алыуҙа методика төрләлеге – совет һәм постсовет осоронда халыҡ иҫәбен алыуҙы үткәргәндә милләтте бидәләүгә төрлөсә ҡараш.

Дөйөм алғанда, башҡорт этносы үҫешендә беҙ бөгөн күҙәткән заманса тенденциялар атап үтелгән факторҙарҙың йоғонтоһона бәйле.

Башҡортостан территорияһында башҡорттар күпләп төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығышта – Башҡортостандың Урал аръяғы төбәгендә йәшәй, унда башҡорттар һаны 70 проценттан 96 процентҡа тиклем етә. Республиканың төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш райондарында башҡорттар 50-70 процент тәшкил итә. Үҙәк, көнбайыш төбәктәрҙәге район һәм ҡалаларҙа башҡорттар өлөшө 10-50 процент араһында тирбәлә.

Башҡорттар йәшәгән тарихи территорияға, Башҡортостан Республикаһынан тыш, Урал-Волга буйы төбәге – Силәбе, Ырымбур, Свердловск, Ҡурған, Һамар, Һарытау өлкәләре, Татарстан һәм Удмурт республикалары инә.

Башҡорттар иң күбе Силәбе өлкәһендә (2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса 126 513 кеше) йәшәй. Өлкәнең бер нисә районында: Арғаяш, Ҡонашаҡ, Сосновка һ.б. – башҡорттар күпселекте тәшкил итә.

Ҡурған өлкәһендә башҡорттар 12 257 кеше. Улар Сафакүл, Әлмән һәм Щучье райондарында күпләп йәшәй.

Башҡорттарҙың байтаҡ өлөшө – 46 696 кеше – Ырымбур өлкәһе территорияһында, нигеҙҙә Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ, Гай, Александровский, Красногвардейский, Түлгән райондарында йәшәй.

Пермь крайында 32 730 башҡорт иҫәпләнә. Уларҙың ҙур өлөшө Барҙы, Чернушка һәм Көйәҙе райондарына тура килә.

Һамар өлкәһендә башҡорттар һаны 7 290 кеше, улар Оло Чернигов һәм Оло Глушица райондарында йәшәй.

Һарытау өлкәһендә – 3 489 кеше, башҡорт ауылдары Перелюб һәм Пугачев райондарында урынлашҡан.

Татарстан Республикаһында 13 726 башҡорт иҫәпләнгән, иң күбе Әлмәт районында теркәлгән.

2010 йылда Удмурт Республикаһында башҡорттар һаны 3 454 кеше була.

Урал-Волга буйының атап үтелгән төбәктәрендә 1980 йылдар аҙағына тиклем башҡорт этносының артыуы күҙәтелә. Бында башҡорттарҙың БАССР менән сиктәш төбәктәргә күсенеп ултырыу процесы мөһим роль уйнай. Әммә артабанғы тиҫтә йылдарҙа был күренештең кәмеүе күҙәтелә. 2002 йылда Урал-Волга буйы төбәктәрендә башҡорттар һаны – 14 160, ә 2010 йылға 30 меңдән ашыу кешегә кәмей.

Урал-Волга буйы төбәктәрендә башҡорттарҙың кәмеүе уларҙың башҡа төбәктәрҙә артыуы менән аңлатыла. 1970 йылдарҙа иң ҙур үҫеш Ханты-Манси, Ямал-Ненец автономиялы округтарында теркәлә, 2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ

иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса уларҙа башҡорттар һаны 35 428 һәм 8 297 кеше тәшкил итә. Башҡорттар һаны артыуы Мәскәү (6 609 кеше), Санкт-Петербург (2 706 кеше) ҡалаларында, Мәскәү өлкәһендә (3 975 кеше) теркәлә.

Рәсәйҙең атап үтелгән төбәктәрендә башҡорттарҙың артыуы, күп осраҡта, социаль-иҡтисади сәбәптәргә бәйле (белгестәрҙең һәм эшселәрҙең, шулай уҡ уларҙың ғаиләләренең ошо төбәк территорияларындағы нефть-газ ятҡылыҡтарын эшкәртеү һәм үҙләштереү урындарына күсенеүе), башҡорт халҡының әүҙем миграция процестары менән аңлатыла.

Башҡорттарҙың һаны тормош кимәле һәм сифаты юғары булған, мәшғүллек өлкәһе үҫешкән төбәктәрҙә арта һәм, киреһенсә, тормош кимәленең төшөүе, мәшғүллек өлкәһендә һайлау сикле булыуы ошо төбәктәрҙән халыҡтың ситкә китеүенә йоғонто яһай.

Башҡорт халҡының тәбиғи артыу процестары рус, татар этностары менән сағыштырғанда, тыуымдың юғары булыуы менән аңлатыла. Тыуымдың юғары булыуы башҡорттарҙа ауыл (традицион) тормошона хас булған һыҙаттарҙың һаҡланыуына, урбанизация процестарына сағыштырмаса һуңыраҡ ҡушылыуына бәйле. Шул уҡ ваҡытта, ғалимдар билдәләүенсә, башҡорт халҡында артабан да юғары тыуым күҙалланған, был ысынбарлыҡтағы аныҡ һандар менән сағыштырғанда этностың тормошҡа ашырылмаған репродуктив потенциалы хаҡында һөйләй.

Башҡорт халҡының үлем күрһәткестәре Рәсәйҙең башҡа халыҡтарына хас шул уҡ дөйөм һыҙаттарға эйә: вафат булыусылар өлөшөнөң ауыл халҡы һәм эшкә яраҡлы ир-ат араһында күберәк булыуы күҙәтелә.

Шул уҡ ваҡытта башҡорттар, тыуым күрһәткестәренең юғары булыуына бәйле, тәбиғи артым темптарын һаҡлап ҡалыуын дауам итә. Башҡортостан Республикаһында ауылда үлем күрһәткесе ҡалалағынан күберәк. Этностың яртыһынан күберәге ауыл ерендә йәшәүен иҫәпкә алғанда, был проблема башҡорт халҡының демографик үҫеше өсөн көнүҙәк булып тора.

Башҡортостан Республикаһы халҡының милли составының күп төрлөлөгө, мәҙәни-ара бәйләнештәрҙең тарихи тәжрибәһе, уның территорияһында йәшәүсе халыҡтарҙың традицияларын һаҡлау һәм нығытыу башҡорттарҙың һәм башҡа халыҡтарҙың ҡаҙанышы һәм Рәсәй дәүләтселеген нығытыу факторы булып тора, Башҡортостанда һәм башҡорттар йәшәгән башҡа субъекттарҙа тотороҡлоҡто һәм милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе артабан үҫтереүҙең ыңғай йүнәлешен тәьмин итә.

**Милли үҙенсәлекте һаҡлап ҡалыу мәсьәләләре**

Урбанизация этностың социаль, мәҙәни, демографик үҫешенә һиҙелерлек йоғонто яһаған һәм яһай. Социаль-мәҙәни перспективалары һәм хәүефтәре булған күпләп урбанизацияланыу процесы башҡорт этносы өсөн әле тамамланмаған тип әйтергә була. Урбанизация процестарының этностың торошо һәм үҫешенә йоғонтоһо бер төрлө генә түгел. Бер яҡтан, урбанизация һөҙөмтәһендә башҡорттар

глобализация процестарына әүҙем ҡушылһа, ҡалала улар үҙенең этник үҙенсәлеген, телен һәм мәҙәниәтен һаҡлап ҡалыу кеүек проблема менән күҙмә-күҙ осраша.

Башҡорт халҡының мәҙәниәте һәм теле дәүләт тарафынан һаҡлана. Башҡорт теле рус теле менән бер рәттән Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле тип иғлан ителгән. Башҡорт теле Башҡортостан Республикаһының дәүләт мәғариф системаһында уҡытыла. XXI быуат башында Башҡортостанда башҡорт телендә уҡытыу 878 мәктәптә алып барылһа, уҡытыу рус телендә алып барылған 512 мәктәптә башҡорт кластары асылған.

Этностың этник үҙаңын һаҡлауҙа туған тел мөһим роль уйнай. Башҡорттар мөхитендә барған этнос һәм тел процестары – славян, төрки, фин-уғыр халыҡтары менән тығыҙ бәйләнеш эҙемтәһе. Башҡорт халҡының оҙайлы тарих арауығында рустар һәм татарҙар менән этномәҙәни бәйләнеше башҡорттар мөхитендә ике һәм өс теллелеккә нигеҙләнгән ҡатмарлы этнотел процестарын барлыҡҡа килтерҙе.

Социологик мәғлүмәттәр башҡорттарҙың телгә мөнәсәбәтен социаль-территориаль мөхиткә, респонденттың йәшенә бәйләй: ауылдағы оло йәштәгеләр башҡорт телен яҡшы һәм юғары кимәлдә белә, улар уны туған тел тип таный һәм тормоштоң төрлө өлкәләрендә ҡуллана; ҡала халҡы, бигерәк тә ҙур ҡалаларҙа йәшәүсе йәштәр, үрҙә атап үтелгән индикаторҙарға ярашлы, рус теленә өҫтөнлөк бирә; башҡорттарҙың бер өлөшө өсөн башҡорт теле аралашыу теле булмаһа ла, күберәген символик роль уйнай һәм үҙенең ниндәй халыҡ вәкиле икәнлеген күрһәтеү өсөн туған тел тип баһалана.

Социологик мәғлүмәттәргә ярашлы, Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттарға, бигерәк тә йәштәр һәм балаларға, башҡорт телен түбән кимәлдә белеү хас. Әммә ул үз-ара, башлыса ғаиләнең оло йәштәге ағзалары менән аралашҡанда йыш ҡулланыла.

Ситтә йәшәүсе башҡорттарҙың өстән ике өлөшө телде өйрәнергә теләй. Әммә уларҙы туған телдә сыҡҡан мәғлүмәт менән тәьмин итеүҙең түбән кимәлдә булыуы күҙәтелә. Бигерәк тә йәштәр һәм балалар өсөн тәғәйен контент ҡәнәғәтләнерлек түгел, был атап үтелгән проблеманың киҫкенлеге тураһында һөйләй.

Этносты үҫтереүҙә ғаилә төп роль үтәй. Ғаилә борондан башҡорт халҡының традицион рухи ҡиммәттәре терәге, этностың демографик яҡтан ғына түгел, этномәҙәни йәһәттән дә үҫешеү институты була. Эмпирик тикшеренеүҙәр хәҙерге башҡорт халҡы тормошонда ғаиләнең әһәмиәтен һәм ҙур роль уйнауын билдәләй. Әммә социаль-иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ, бигерәк тә ауылдарҙа һәм бәләкәй ҡалаларҙа тормош кимәленең түбән булыу шарттарында хәҙерге башҡорт ғаиләһе түбән килем, эш урындары булмауына бәйле етди матди, иҡтисади проблемалар менән осраша. Барлыҡ йәш ғаиләләр ҙә үҙҙәре күпме теләгәнсә бала табып үҫтереү өсөн торлаҡ мәсьәләһен хәл итеү, лайыҡлы тормош кимәлен булдырыу мөмкинлегенә эйә түгел.

Ауыл һәм ҡалаларҙа башҡорт балалары йыш ҡына сифатлы мәктәпкәсә һәм дөйөм белем алыу, өҫтәмә белем биреү дәрестәренә йөрөү мөмкинлегенә эйә түгел.

Ауылда һәм бәләкәй ҡалаларҙа йәшәгән башҡорт ғаиләһе өсөн сифатлы медицина хеҙмәтләндереүе кимәле түбән.

Атап үтелгән сәбәптәр (хеҙмәт баҙарындағы көрсөк, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт өлкәһендәге хеҙмәттәрҙе алыу шарттарының сикле булыуы) хәҙерге башҡорт ғаиләһен, башҡорт йәштәрен үҙҙәренең ауылынан һәм ҡалаһынан күсенергә, һәм йыш ҡына республиканан ситкә китергә этәрә. Башҡорт халҡының ситкә күсеүе этностың демографик, социаль, этномәҙәни яҡтан үҫеүе өсөн һиҙелерлек кире эҙемтәләргә килтереүе ихтимал.

Шул уҡ ваҡытта, хәҙерге Рәсәйҙә асыҡ йәмғиәт һәм баҙар иҡтисады формалашҡанда барлыҡа килгән мөһим үҙгәртеп ҡороуҙарға, шулай уҡ Рәсәй Федерацияһының дәүләт милли сәйәсәтендәге ҡайһы бер үҙгәрештәргә бәйле бер ни тиклем проблемалар бар. Атап әйткәндә, мәктәпкәсә, дөйөм урта һәм юғары белем биреү системаһын ойоштороуға бәйле проблемалар актуаллеген юғалтмай, сөнки улар башҡорт халҡы вәкилдәре өсөн белем биреүҙе ойоштороу бурысын тулыһынса үтәмәй.

Башҡорт халҡының хәл-торошона шулай уҡ түбәндәге кире факторҙар ҙа йоғонто яһай:

а) түбәк иҡтисади бүленеше шарттарында социаль һәм милек тигеҙһеҙлегенең юғары кимәлдә булыуы;
б) Башҡортостан Республикаһында, Рәсәй Федерацияһында һәм донъяла башҡорттарҙың традицион рухи ҡиммәттәренең юйыла барыуы;
в) айырым власть вәкилдәренең хоҡуҡи нигилизмы;
г) башҡорт үҙенсәлеген формалаштырыу, милләт-ара аралашыу мәҙәниәтен тәрбиәләү, башҡорт халҡының тарихын һәм традицияларын, уның дәүләтте нығытыуҙағы һәм Ватанды һаҡлауҙағы берҙәмлеге тәжрибәһен өйрәнеү буйынса мәғариф һәм мәҙәни-ағартыу сараларының етерлек кимәлдә булмауы;
д) Башҡортостан Республикаһының мәктәпкәсә һәм дөйөм урта белем биреү учреждениеларында башҡорт телен уҡытыуҙың мотлаҡ булмауы;
е) башҡорт телендә юғары белем биреү программаларын һәм ғилми тикшеренеүҙәрҙе тормошҡа ашырыу буйынса ведомство-ара һәм кимәл-ара координацияның булмауы;
ж) дәүләт хеҙмәтендә һәм киң йәмәғәт даирәләре ҡатнашлығында үткән асыҡ сараларҙа башҡорт телен ҡулланыу мәсьәләһе етерлек дәрәжәлә көйләнмәү сәбәпле, башҡорт халҡының үҫешенә бәйле ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереүҙе тәьмин итеү мөмкинлектәренең сикле булыуы;
з) юғары белем биреү, фән һәм дәүләт идараһы системалары аша юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләү буйынса системалы эш алып барылмауы;
и) башҡорт бизнес структураларын үҫтереү буйынса системалы ярҙам булмауы;
к) Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәүсе башҡорттарҙың милли мәҙәниәтте ҡулланыуҙа, башҡорт телен өйрәнеүҙә мөммкинлектәренең сикле булыуы;

л) ҡалаларҙа һәм Башҡортостандан ситтә йәшәгән рус телле башҡорттарға тәғәйенләнгән башҡорт телендәге мәғлүмәт материалдарында, милли мәҙәни әҫәрҙәрҙә балалар һәм йәштәр өсөн контенттың булмауы;

м) мәғарифтың инновацион үҫеше талаптарына ярашлы башҡорт телен уҡытыуҙа яңы методикаларҙың булмауы.

1996 йылғы Рәсәй Федерацияһы Дәүләт милли сәйәсәте концепцияһын тормошҡа ашырыу Рәсәй Федерацияһының бөтөнлөгөн һәм берҙәмлеген һаҡлап ҡалырға ярҙам итте. 2000 йылда ҡабул ителгән Рәсәй дәүләтселеген нығытыу буйынса саралар тарҡалыу процестарын туҡтатырға булышлыҡ итте һәм унда йәшәгән халыҡтарҙың тарихи бәйләнешен нығытыу, милләт-ара татыулыҡты һәм рухи уртаҡлыҡты артабан үҫтереү өсөн нигеҙ булдырҙы.

Башҡортостан Республикаһында һәм башҡорттар күпләп йәшәгән урындарҙа традицион рәүештә социаль-иҡтисади һәм сәйәси тотороҡлолоҡ һаҡлана, башҡорт халҡын үҫтереү өсөн төрлө проекттар эшләнде, милли мәғариф өлкәһендә, башҡорт телен үҫтереү буйынса хоҡуҡтарын яҡлау буйынса аныҡ аҙымдар яһалды.

Алда атап үтелгән кире мәсьәләләрҙе әлеге Стратегияға таянып Башҡортостан Республикаһының дәүләт милли сәйәсәте өлкәһендә яңы бурыстар һәм өҫтөнлөклө йүнәлештәр билдәләү нигеҙендә хәл итеү күҙаллана.

## II. Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһының маҡсаттары, принциптары, өҫтөнлөклө йүнәлештәре һәм бурыстары

Стратегияның маҡсаттары демократия һәм федерализмдың конституцион принциптарына, шулай уҡ берҙәмлек, илһөйәрлек һәм социаль ғәҙеллек принциптарына нигеҙләнеп башҡорт йәмәғәтселеге һәм дәүләттең берлектәге ғәмәлдәре менән тормошҡа ашырыла.

**Стратегияның маҡсаттары:**

1) башҡорт халҡының үҙаңын һәм рухи берҙәмлеген нығытыу;
2) милли мәғариф нигеҙен һаҡлау һәм үҫтереү;
3) башҡорттар араһынан гуманитар, тәбиғи һәм теүәл фәндәр өлкәһендә юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләүҙе тәьмин итеү;
4) бәләкәй һәм урта хужалыҡ эшмәкәрлеге формалары сиктәрендә перспективалы бизнес-проекттарҙы үҫтереү юлы менән ауылда йәшәгән башҡорт халҡының тормош кимәлен күтәреү;
5) башҡорттарҙың хәҙерге донъя шарттарына социаль һәм мәҙәни яраҡлашыуы нигеҙендә башҡорт халҡының социаль-һөнәри структураһын үҫтереү һәм камиллаштырыу.

Был маҡсаттарға ирешеү башҡорт халҡының иҡтисади, социаль-мәҙәни, эске һәм тышҡы сәйәси өлкәләрҙә уңышлы үҫешеүе өсөн оҙайлы мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн нигеҙ булып торасаҡ.

**Стратегияның төп принциптары:**

1) Рәсәй Федерацияһының дәүләт бөтөнлөгө, милли хәүефһеҙлеге, дәүләт власы системаһының берҙәмлеге;
2) башҡорт халҡының үҙ-үҙен үҫтереү принциптары;
3) расаһына, милләтенә, теленә, сығышына, мөлкәтенә, вазифаһына, йәшәү урынына, дингә мөнәсәбәтенә, инаныуҙарына, ниндәй йәмәғәт берекмәләрендә тороуына һәм башҡа шарттарға ҡарамайынса кеше һәм граждандың тиңлеге һәм азатлығы хоҡуҡтары;
4) башҡорттарҙың иҡтисади, социаль һәм мәҙәни үҫешен, борондан йәшәгән урынын һәм традицион тормош рәүешен һаҡлауға ярҙам итеү менән уларҙың хоҡуҡтары гарантияларын тәьмин итеү;
5) Стратегияның тармаҡ-ара булыуын иҫәпкә алып, уның бурыстарын комплекслы тормошҡа ашырыу;
6) милләт-ара (этнос-ара) ҡаршылыҡтарҙы һәм низағтарҙы ваҡытында һәм тыныс юл менән хәл итеү.

**Стратегияның төп йүнәлештәре:**

1) Рәсәй Федерацияһының дәүләт милли сәйәсәте өлкәһендә Башҡортостан Республикаһында идара итеүҙе камиллаштырыу;
2) милләт-ара тыныс һәм килешеп йәшәүҙе тәьмин итеү, милләт-ара (этнос-ара) мөнәсәбәттәрҙе гармониялаштырыу;
3) Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын һөҙөмтәле тормошҡа ашырыу өсөн социаль-иҡтисади шарттар булдырыу;
4) башҡорт халҡының берҙәмлеген һәм рухи уртаҡлығын нығытыу;
5) социаль-мәҙәни өлкәлә башҡорт халҡының хоҡуҡтарын тормошҡа ашырыу өсөн шарттар булдырыу;
6) мәғариф, үҫеп килеүсе быуынға граждандлыҡ-илһөйәрлек тәрбиә биреү системаһын үҫтереү;
7) башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн уңайлы шарттар менән тәьмин итеү;
8) башҡорт халҡын үҫтереү контексында дәүләт һәм муниципаль органдарҙың граждандар институттары менән килешеп эш итеүен камиллаштырыу;
9) башҡорт халҡына ярҙам итеү өлкәһендә халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереү.

**Стратегияны тормошҡа ашырыу сиктәрендәге бурыстар:**

1) башҡорт халҡын үҫтереүгә ярҙам итеү өлкәһендә дәүләт идараһын камиллаштырыу буйынса бурыстар:

- башҡорт халҡы берҙәмлеген нығытыу, милләт-ара тыныслыҡ һәм татыулыҡты тәьмин итеү өсөн дәүләт һәм муниципаль органдар, граждандар йәмғиәте институттарының эшмәкәрлеген берләштереү;
- дәүләт идараһы системаһында башҡорт халҡының мәнфәғәттәрен юғары кимәлдә иҫәпкә алып уларҙы ҡәнәғәтләндереүгә булышлыҡ иткән хоҡуҡи, ойоштороу һәм матди шарттар булдырыу;
- башҡорт халҡының хоҡуҡтарына һәм мәнфәғәттәренә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә башҡорттар үҙҙәре ҡатнашһын өсөн шарттар тыуҙырыу;
- Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһындағы мәсьәләләрҙе дәүләт стратегик планлаштырыуы документтарында иҫәпкә алыу һәм тормошҡа ашырыуҙы тәьмин итеү;
- Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырғанда дәүләт һәм муниципаль органдарҙың идара итеү һәм координациялау системаһын камиллаштырыу;
- түбәндәге мәсьәләләргә ҡағылышлы өлөштә Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтен камиллаштырыуға булышлыҡ итеү:
- башҡорт халҡының этномәҙәни, үҙаңы үҫешен, берҙәмлеген нығытыу, милләт-ара (этнос-ара) мөнәсәбәттәрҙе гармониялаштырыу, милләт-ара (этнос-ара) һәм дин-ара диалогтарҙы үҫтереү һәм низағтарҙы иҫкәртеү, мигранттарҙың

социаль һәм мәҙәни интеграцияланыуы һәм ҡулайлашыуы өсөн шарттар булдырыуға бәйле мәсьәләләрҙе көйләү;

- башҡорт халҡының үҙенсәлеген, мәҙәниәтен, телен һәм традицияларын һаҡлау һәм яҡлау, этнологик мониторинг һәм низағтарҙы иҫкәртеү өлкәһендә эшмәкәрлек алып барған коммерцияға ҡарамаған Рәсәй ойошмаларын социаль йүнәлешле тип таныу;
- Стратегияның бурыстарын үтәү буйынса Башҡортостан Республикаһының дәүләт власы органдары эшмәкәрлеген камиллаштырыуҙы ойоштороу;
- халыҡтың барлыҡ төркөмдәренең дә үҙ инициативаһын һәм эшмәкәрлеген күрһәтә алыу өсөн шарттар булдырыу маҡсатында, башҡорт халҡының традицион территориаль үҙойошоуы формаларын ҡулланыу ихтималлығын иҫәпкә алып, урындағы үҙаидаралыҡ ойошмаларын камиллаштырыу, шулай уҡ урындағы үҙидара органдарының эшмәкәрлегендә уларҙың мәнфәғәтен һәм ихтыяжын иҫәпкә алыу;
- башҡорт халҡының берҙәмлеген нығытыуға, граждандарлыҡ һәм милләт-ара татыулыҡ, башҡорт халҡының башҡа халыҡтар менән этномәҙәни үҫешен тәьмин итеүгә йүнәлтелгән дәүләт программаһын эшләү;
- Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырыу мәсьәләләре буйынса билдәләнгән тәртиптә раҫланған берҙәм уҡыу программалары буйынса дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәрен әҙерләү, уларҙы яңынан уҡытыу һәм квалификацияларын күтәреүҙе тәьмин итеү;

2) Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын һөҙөмтәле тормошҡа ашырыу өсөн социаль-иҡтисади шарттар тәьмин итеү буйынса бурыстар:

- тупланған фәнни-техник һәм кадрҙар ҡеүәтен, хеҙмәттең территориаль бүленеше һәм етештереү кооперацияһының өҫтөнлөгөн, етештереү көстәренең рациональ урынлаштырылыуын иҫәпкә алып Башҡортостан Республикаһының, Рәсәй Федерацияһы субъекттары һәм муниципаль берәмектәренең баланслы, комплекслы һәм системалы үҫешен тәьмин итеү; төбәктәрҙең социаль-иҡтисади дифференциацияһы кимәлен кәметеү; граждандарҙың социаль тигеҙлеге һәм тиңлеге, тыныслыҡ һәм татыулыҡ принциптарын тормошҡа ашырыу өсөн өҫтәмә шарттар булдырыу маҡсатында бюджет-ара мөнәсәбәттәрҙе камиллаштырыу;
- граждандарҙың эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге азатлығын һәм социаль яҡланыуын тәьмин итеү маҡсатында Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй субъекттарында башҡорттар йәшәгән муниципаль берәмектәр халҡының иҡтисади һәм социаль үҫеше өсөн уңайлы шарттар булдырыу;
- халыҡтың төбәк һәм этномәҙәни йәшәү рәүеше күп төрлөлөгөн иҫәпкә алып, уларҙы күсереп ултыртыу буйынса һығылмалы система булдырыу;
- халыҡтың мәшғүллеген арттырыу маҡсатында башҡорт халҡы борондан йәшәгән һәм традицион хужалыҡ эшмәкәрлеге алып барған урындарҙа, шул

иҫәптән ауылдарҙа, алыҫ райондарҙа халыҡ кәсептәрен һәм кәсепселекте үҫтереүгә булышлыҡ итеү;
- боронғо йәшәү мөхитен һәм традицион йәшәү рәүешен һаҡлауҙы тәьмин итеүҙе иҫәпкә алып, башҡорттарҙың традицион хужалыҡ эшмәкәрлеген заманса иҡтисади шарттарға яраҡлаштырыу кимәлен күтәреү;
- граждандарҙың йәшәү урыны буйынса, шулай уҡ традицион йәшәү урыны төпкөлдә булғанда ла, социаль, медицина һәм башҡа хеҙмәт төрҙәре менән ҡуллана алыуын тәьмин итеү;
- Башҡортостан Республикаһының хеҙмәт баҙары һәм иҡтисадының ихтыяждарын, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙе баланслы үҫтереүҙе, башҡорттар күпләп йәшәгән урындарҙа эш урындары булдырыу һәм башҡорт ғаиләләренә ярҙам итеүҙе дәртләндереү аша демографик сәйәсәт мәсьәләләрен хәл итеүҙе тәьмин итеү;

3) милли-мәҙәни үҫешкә ярҙам итеү буйынса бурыстар:
- башҡа халыҡтар менән берҙәмлек һәм дуҫлыҡ, милләт-ара (этнос-ара) татыулыҡ идеялары нигеҙендә башҡорт халҡының рухи һәм мәҙәни ҡеүәтен һаҡлау һәм арттырыуҙы тәьмин итеү;
- башҡорт халҡының тарихы һәм мәҙәниәте тураһында белемде таратыу;
- Рәсәй Федерацияһы халыҡтары традициялары һәм әхләҡ нормаларына ярашлы, башҡорттарҙың милләт-ара (этнос-ара) аралашыу мәҙәниәтен булдырыу;
- тейешле төбәк программаларын ҡабул итеү һәм тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә төбәк-ара мәҙәни бәйләнештәрҙе үҫтереү, дәүләт теле- һәм радиоканалдарын, йәмәғәт телевидениеһын йәлеп итеп башҡорт халҡының традицион һәм заманса әҙәби һәм сәнғәт әҫәрҙәрен таратыу, һынлы сәнғәт күргәҙмәләре, ижади коллективтарҙың гастролдәрен ойоштороу;
- этнографик һәм мәҙәни туризмды, һауыҡтырыу һәм рекреацион зоналарҙы үҫтереү, милли спорт төрҙәренә дәүләт ярҙамын киңәйтеү, башҡорт халҡының спартакиадаһын үткәреү;
- йәштәрҙең башҡорт халҡының хәрби дан урындарына, мәҙәни мираҫ объекттарына (тарих һәм мәҙәниәт һәйкәлдәре) йөрөүен ойоштороу;
- башҡорт халҡының мәҙәни мираҫын һаҡлауҙы һәм арттырыуҙы түбәндәге юлдар аша тәьмин итеү:
- йәмғиәттә башҡорт халҡының тарихи мираҫына һәм мәҙәни ҡиммәттәренә ихтирамлы ҡараш булыдырыу;
- башҡорт халҡының традицион милли ҡиммәттәре, матди һәм матди булмаған тарихи мираҫы менән танышыу мөмкинлеген киңәйтеү;
- мәҙәни мираҫты һаҡлау, шул иҫәптән мәҙәни ҡиммәттәрҙе реставрациялау өлкәһендә ирекмәндәр хәрәкәтен үҫтереү;
- мәҙәниәт өлкәһендә милли кадрҙар әҙерләү системаһын камиллаштырыу;

- башҡорт халҡының әһәмиәтле тарихи ваҡиғаларын яҡтыртҡан, ҡаҙаныштарын пропагандалаған фәнни тикшеренеүҙәргә, фәнни-популяр публикациялар, әҙәбиәт, сәнғәт, кино, телевидение әҫәрҙәре, интернет-продукция сығарыусыларға өҫтәмә дәүләт ярҙамы сараларын эшләү;

4) Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһының мәғариф, йәш быуынға илһөйәрлек һәм гражданлыҡ тәрбиә биреү өлкәһендәге бурыстары белем биреү процесының барлыҡ этаптарында ла балаларҙа һәм йәштәрҙә гражданлыҡ үҙаң, илһөйәрлек тойғоһо, гражданлыҡ яуаплылығы, башҡорт халҡының тарихы өсөн ғорурлыҡ уятыуҙы, толерантлыҡты, граждандарҙың намыҫын һәм милли абруйын ихтирам итеүҙе, башҡорт халҡының рухи һәм әхлаҡи ҡиммәттәренә нигеҙләнгән милләт-ара аралашыу мәҙәниәте тәрбиәләүҙе үҙ эсенә ала:

- белем биреү процесында гуманитар йүнәлештең ролен күтәреү, Рәсәй берҙәмлеге һәм теләктәшлегенең сығанаҡтарын асып биргән әһәмиәтле ваҡиғалар тураһында тарихи документтар аша башҡорт халҡының Рәсәй халыҡтары менән күп быуатлыҡ бәйләнеш тарихын өйрәнеү буйынса уҡыу программалары эшләү;
- техник һәм тәбиғи фәнни дисциплиналарға ҡыҙыҡһыныу арттырыу маҡсатында дөйөм белем биреү учреждениеларында белем биреү системаһын камиллаштырыу;
- дөйөм белем биреү учреждениелары программаларына башҡорт халҡының милли ғөрөф-ғәҙәттәре һәм мәҙәни ҡиммәттәре тураһында мәғлүмәттәрҙе үҙ эсенә алған белем биреү курстарын индереү;
- этномәҙәни һәм тел күп төрлөлөгөн һаҡлау һәм үҫтереүҙең һөҙөмтәле ысулы булараҡ, белем биреү системаһында ике теллелекте ҡулланыу;
- юғары һәм урта һөнәри белем биреү учреждениеларында студенттарҙың үҙидаралығы стурктураларын (клубтар, советтар һ.б.) милли нигеҙҙә ойоштороу һәм уларҙың эшмәкәрлеген координациялау өсөн шарттар булдырыу;
- башҡорт халҡы вәкилдәренә илһөйәрлек тәрбиә биреүгә йүнәлтелгән йәмәғәт инициативаларына ярҙам итеү;
- үҫеп килеүсе быуында милли үҙаң булдырыу һәм милләт-ара аралашыу мәҙәниәтен тәрбиәләү маҡсатында уҡыу әҙәбиәтен һәм уҡытыу программаларын камиллаштырыу;
- педагогик кадрҙар әҙерләү, ҡайтанан әҙерләү һәм квалификацияларын күтәреү;
- хеҙмәт баҙарында талап ителгән һөнәрҙәр буйынса белем алыу һәм квалификация күтәреү маҡсатында башҡорт халҡы вәкилдәренең белем алыу миграцияһына ярҙам итеү;

5) туған тел һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булараҡ башҡорт теленә ярҙам итеү буйынса бурыстар:

– башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү, башҡорт телен туған тел һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле буларак ҡулланыу өсөн уңайлы шарттар булдырыу;
– дәүләт программаһына башҡорт телен яҡлау һәм һаҡлау буйынса саралар индереү;
– граждандарҙың туған телендә уҡыу хоҡуғын тәьмин итеү;
– граждандарҙың аралашыу, белем алыу, тәрбиә биреү һәм ижад итеү телен ирекле һайлау хоҡуғын боҙоуға юл ҡуймау;
– Рәсәй Федерацияһы субъекттары араһында милли телдәрҙәге теле-, радиопрограммалар, аудио- һәм видеоматериалдар, баҫма продукция менән алмашыу;
– башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәрен Рәсәй халыҡтары телдәренә тәржемә итеү тәжрибәһен тергеҙеү һәм ярҙам итеү;
– сит илдәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙгә һәм уларҙың балаларына башҡорт телен һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә булышлыҡ итеү;

6) сит илдәрҙә йәшәгән башҡорттарҙың социаль һәм мәҙәни берләшеүен (интеграция) формалаштырыу буйынса бурыстар:
– сит илдәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең Башҡортостан Республикаһына үҙ теләге менән күсенеүе өсөн иҡтисади һәм социаль шарттар булдырыу;
– Стратегияны тормошҡа ашырғанда башҡорт халҡының мәнфәғәтен һәм этномәҙәни ғөрөф-ғәҙәттәрен иҫәпкә алып социаль-иҡтисади һәм демографик мәсьәләләрҙе хәл итеү;
– дәүләт һәм муниципаль органдарҙың сит илдәрҙә йәшәүсе башҡорттарҙың социаль һәм мәҙәни яраҡлашыу һәм берләшеүенә ярҙам итеүсе йәмәғәт ойошмалары менән үҙ-ара бәйләнешен тәьмин итеү;
– башҡорттар йәшәгән илдәрҙә башҡорт телен, Башҡортостан тарихын һәм Рәсәй Федерацияһының ҡануниәте нигеҙҙәрен өйрәнеү буйынса курстар ойоштороуҙы дәртләндереү;
– репатриант башҡорттарҙа республика мәҙәниәтенә һәм традицияларына ихтирамлы мөнәсәбәт тәрбиәләгән саралар системаһын камиллаштырыу;
– Рәсәй Федерацияһы дәүләт миграция сәйәсәтен тормошҡа ашырғанда ҡулланған Евразия интеграция процестарын көйләү тәжрибәһен һәм потенциалын ҡулланыу;
– мәҙәни һәм уҡыу үҙәктәренең инфраструктураһын ҡулланыу нигеҙендә Рәсәй субъекттарындағы милли йәмәғәт берләшмәләре, милли-мәҙәни автономияларҙың ролен нығытыу;
– башҡорттар юридик һәм көнкүреш хеҙмәттәр менән файҙаланған, Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәте, тарихы һәм ҡануниәт нигеҙҙәре менән таныша алған күп функциялы мәҙәни-белем биреү интеграция үҙәктәре

эшмәкәрлегендә дәүләт-шәхси партнерлыҡ нигеҙендә йәмәғәт берекмәләренең һәм дини ойошмаларҙың ҡатнашыуын тәьмин итеү;

7) Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырыуҙа мәғлүмәт менән тәьмин итеү буйынса бурыстар:

– Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырыу мәсьәләләрен яҡтыртҡан дәүләт, муниципаль һәм дәүләткә ҡарамаған теле- һәм радиокомпанияларҙы, баҫма матбуғатты, журналистарҙы дәртләндереү сараларын булдырыу һәм камиллаштырыу;
– Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы маҡсаттары һәм бурыстарын тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән реклама һәм сәнәғәт продукцияһын таратыу, социаль реклама һәм башҡа видеопродукция эшләп теле- һәм радиоэфирҙа урынлаштырыу, тематик радио- һәм телетапшырыуҙар, гәзит һәм журналдарҙа рубрикалар, интернет-проекттар булдырыуға ярҙам итеү;
– киң мәғлүмәт сараларында милли үҫеш мәсьәләләрен иң яҡшы яҡтыртыуға конкурс ойоштороу һәм үткәреү;
– Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырыуға бәйле көнүҙәк мәсьәләләр буйынса дәүләт һәм муниципаль орган етәкселәренең, йәмәғәт берекмәләре һәм дини ойошмалар вәкилдәренең киң мәғлүмәт сараларында сығышын ойоштороу;
– Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырыу мәсьәләләре буйынса дәүләт власы һәм урындағы үҙидаралыҡ органдары тарафынан граждандар йәмғиәте һәм журналистар берлеге ҡатнашлығында баҫма һәм электрон киң мәғлүмәт сараларында донъя күргән сығыштарҙың мониторингын алып барыу, шулай уҡ журналистарҙың ошо өлкәлә квалификацияһын күтәреү буйынса даими семинарҙар үткәреү;
– милләт-ара күрә алмаусанлыҡҡа йәки дошманлыҡ тыуҙырыуға йүнәлтелгән материалдарҙың донъя күреүенә юл ҡуймау маҡсатында йәмәғәт контроле сарларын ҡулланыу;

8) Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырыуҙа дәүләт һәм муниципаль органдарҙың граждандар йәмғиәте институттары менән үҙ-ара бәйләнешен камиллаштырыу буйынса бурыстар:

– Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы өлкәһендә идара итеү ҡарарҙарын әҙерләүҙә төбәк Йәмәғәт палатаһының ҡатнашыуы;
– дәүләт һәм муниципаль органдар ҡарамағындағы йәмәғәт советтарының милли үҙаңды үҫтереү, милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе гармониялаштырыу, башҡорттарҙың заман ысынбарлығына социаль һәм мәҙәни яраҡлашыуын артабан тәьмин итеү буйынса эшмәкәрлеген көсәйтеү;
– милли йәмәғәт ойошмалары, ассоциациялар, фондтар, милли-мәҙәни автономияларҙың граждандарҙың этномәҙәни ихтыяжын асыҡлау һәм ҡәнәғәтләндереү, милли үҫештә тотороҡлолоҡҡа өлгәшеү, милләт-ара

низағтарҙы иҫкәртеү, әлеге Стратегияны тормошҡа ашырыуҙағы эшмәкәрлегенә ярҙам итеү;

- Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырыу буйынса дәүләт һәм урындағы үҙидара органдарының эшмәкәрлегенә йәмәғәт контролен көсәйтеү;
- Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы өлкәһендә граждандар йәмғиәте институтының проект эшмәкәрлеген финанслау сығанаҡтарының асыҡлығын тәьмин итеү;
- милләт-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендәге низағтарға бәйле хәл-торошто тикшереүҙең асыҡлығын, уларҙы киң мәғлүмәт сараларында тигеҙ ҡарап һәм яуаплылыҡ менән яҡтыртыуҙы тәьмин итеү;
- граждандар йәмғиәте институттарын, шул иҫәптән йәштәр һәм балалар йәмәғәт ойошмаларын балалар һәм йәштәр мөхитендә милләт-ара түҙмәүсәнлек йәки дошманлыҡ сағылыштарын иҫкәртеү буйынса саралар үткәреүгә йәлеп итеү;
- эшмәкәрлектәре Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһы бурыстарын тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән этномәҙәни инфраструктура үҫтереү, шул иҫәптән дуҫлыҡ йорттары, милли мәҙәни үҙәктәр, башҡа дәүләт һәм муниципаль учреждениелар булдырыу;

9) Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырғанда халыҡ-ара хеҙмәттәшлек өлкәһендәге бурыстар:

- рус һәм башҡа халыҡтар менән күп быуатлыҡ дуҫлыҡ традициялары булған башҡорт халҡының ыңғай имиджын фомалаштырыуға ярҙам итеү;
- хәҙерге донъяның һәм цивилизациялар партнерлығының мәҙәни күп төрлөлөгөнә үҙенсәлекле өлөш индереү, сит илдә башҡорттарҙың ыңғай имиджын булдырыуға ярҙам итеү, башҡорт мәҙәниәтен һәм башҡорт телен сит илдәрҙә өйрәнеү, популярлаштырыу һәм таратыуҙы тәьмин итеү;
- Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырыуға йоғонто яһарға һәләтле халыҡ-ара ваҡиғалар һәм халыҡ-ара ойошмалар эшмәкәрлегенә мониторинг үткәреү;
- сит илдәрҙә йәшәгән башҡорттарҙың хоҡуғын һәм мәнфәғәтен халыҡ-ара кимәлдә танылған принциптар һәм Рәсәй Федерацияһының халыҡ-ара килешеүҙәре нигеҙендә яҡлауҙы тәьмин итеү;
- сит илдәрҙә ғәмәлдә булған башҡорт берекмәләренең эшмәкәрлеген берләштереүгә, башҡорттарға йәшәгән илдәрендә хоҡуҡтарын тәьмин итеүгә, тарихи Ватаны менән бәйләнештәрен һаҡлауға булышлыҡ итеү;
- сит илдәрҙә йәшәгән милләттәштәргә, Рәсәйҙең милли-мәҙәни йәмәғәт берекмәләре менән бәйләнештәрҙе киңәйтеү аша уларҙың милли берекмәләренә милли-мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүҙә ярҙам күрһәтеү;

– башҡорттарҙың халыҡ-ара ойошмалар менән хеҙмәттәшлек итеүе.

## III. Стратегияны тормошҡа ашырыу механизмдары

Әлеге Стратегия стратегик планлаштырыу документтары системаһына инә. Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын тормошҡа ашырыуҙың һөҙөмтәлелеге дәүләт һәм урындағы үҙидара органдарының, граждандар йәмғиәте институттарының Стратегияға ярашлы эшләнгән сәйәси, хоҡуҡи, ойоштороу, социаль-иҡтисади, мәғлүмәт һәм башҡа сараларҙы комплекслы ҡулланып өҙлөкһөҙ һәм үҙ-ара килешеп эш итеүе аша тәьмин ителә.

10 стратегик йүнәлеш билдәләнә:

1. башҡорт халҡының демографик үҫешенә булышлыҡ итеү;
2. балалар өсөн башҡорт мәҙәни һәм эстетик мөхитен булдырыу;
3. балалар, үҫмерҙәр, йәштәр өсөн башҡорт мөхитен булдырыу;
4. башҡорт студент йәштәре берләшмәләрен консолидациялау;
5. башҡорт эшҡыуарҙары берләшмәһен консолидациялау;
6. башҡорт уҡытыусылары һәм педагогтары берләшмәһен консолидациялау;
7. өҫтөнлөклө проекттар сиктәрендә урындағы йәмәғәт ойошмалары һәм интеллигенция берләшмәһен консолидациялау;
8. мәҙәниәт-ара аралашыу һәм башҡорт милли мәҙәниәте тураһында ҡараштар формалаштырыу буйынса башҡорт интеллектуаль элитаһы берләшмәһен консолидациялау;
9. Халыҡ-ара һәм төбәк-ара кимәлдә башҡорт берләшмәләрен консолидациялау;
10. башҡорт халҡын хоҡуҡи тәьмин итеү.

“Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)” халыҡ-ара йәмәғәт ойошмалары берлеге Стратегияны тормошҡа ашырыу буйынса саралар планын эшләй, уны Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә йүнәлтә һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте тарафынан тормошҡа ашырылған тематик дәүләт программалары сараларына индереүҙе юллай. Саралар планына стратегик йүнәлештәр, маҡсаттар һәм бурыстар, шулай уҡ профилле ойошма һәм учреждениелар менән килешелгән стратегик инициативалар индерелә (Ҡушымтаны ҡара).

Стратегияны “Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)” халыҡ-ара йәмәғәт ойошмалары берлеге башҡарма властың төбәк органдары һәм йәмәғәт ойошмалары менән берлектә бойомға ашыра. Әлеге Стратегияны тормошҡа ашырыу буйынса саралар планын финанс йәһәтенән тәьмин итеү республика бюджеты һәм бюджетҡа ҡарамаған сығанаҡтар иҫәбенә башҡарыла.

Стратегияны тормошҡа ашырыу барышында уның актуаль йүнәлештәрен һәм тормошҡа ашырылырға тейешле инициативаларын аныҡлау буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә тейеш булған урындағы үҙидара органдары, йәмәғәт берекмәләре, фәнни ойошмалар менән үҙ-ара бәйләнештә булыу талап ителә.

Стратегияны аныҡлап төҙәтеү (корректировкалау) уны тормошҡа ашырыуҙы анализлау, Башҡортостанда, башҡорттар күпләп йәшәгән Рәсәй Федерацияһы субъекттарында милләт-ара мөнәсәбәттәр торошон, этномәҙәни ихтыяждарҙың ҡәнәғәтләндерелеүен күҙәтеү һөҙөмтәһендә башҡарыла.

Стратегияны тормошҡа ашырыу башҡорт халҡының берләшеүенә, үҙаңы нығыныуына һәм уның этномәҙәни үҫешенә, йәмғиәттә хоҡуҡи тәртип һәм сәйәси тотороҡлолоҡ урынлаштырыуға, шулай уҡ башҡорт халҡының абруйы артыуына йоғонто яһаясаҡ фактор булырға тейеш.

Ошо йәһәттән түбәндәге көнүҙәк йүнәлештәрҙе айырым билдәләргә кәрәк:

1. дөйөм мәҙәни киңлек булдырыу контексында башҡорттарҙың милли-мәҙәни мөхитен үҫтереү буйынса йәмәғәт инициатив төркөмдәре (шул иҫәптән тарихи реконструкторҙар, төбәкте өйрәнеүселәр) эшмәкәрлеген үҫтереү һәм уларға ярҙам итеү;
2. республиканың ижади коллективтарының, тарихи-мәҙәни үҙәктәренең, фольклор берекмәләренең, реконструктор берләшмәләренең һ.б. эшмәкәрлеген көйләгән Башҡортостандың берҙәм “мәҙәни календарын” булдырыу. Мәҙәни календарь үҙ эсенә түбәндәге өс төп компонентты алырға тейеш:

– этник берләшмә һәм төркөмдәрҙең көнүҙәк мәҙәни мираҫын һәм заманса сәнғәтен популярлаштырыу һәм презентациялау;
– уны фестиваль йәки конкурс итеп теркәү (төбәкте күрһәтеү, шул иҫәптән туризмды үҫтереү йәһәтенән дә);
– Рәсәй, республика, муниципаль һәм этник кимәлдәге традицион һәм иҫтәлекле даталарҙы билдәләү ;

3. Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының һәм этник берләшмәләренең ихтыяжын иҫәпкә алып социаль-иҡтисади үҫеш программаһын эшләү.

Башҡорт халҡының традицион мәҙәниәтен һаҡлау аша Башҡортостан Республикаһы территорияһын инновацион үҫтереү һәм модернизациялау мәсьәләһенә айырым иғтибар бүлеү түбәндәгеләрҙе күҙаллай:

1. Хәҙерге заманса ҡаҙаныштарҙы башҡорт халҡының көнүҙәк мәҙәниәтенең бер өлөшө булараҡ күрһәтеү. Халыҡ булараҡ башҡорттарҙың, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы һәм унда йәшәгән милли, этник берләшмәләр һәм төркөмдәрҙең Башҡортостан территорияһында ошо ҡаҙаныштарҙы тормошҡа ашырыуға индергән өлөшөн күрһәтеү һәм билдәләү кәрәк.
2. Башҡорт халҡының милли-мәҙәни мираҫы инфраструктураһын (музейҙар, мәҙәни клубтар, өҫтәмә белем биреү учреждениелары, милли спорт төрҙәрен үҫтереү өсөн базалар булдырыу) заманса технологик һәм гуманитар кимәлдә тәьмин итеү. Был ошо инфраструктураны яңыртыуҙы (модернизациялауҙы)

ғына түгел, ә уны республика халҡына ла, ситтән килеүселәргә лә (шул иҫәптән сит ил граждандарына) күрһәтеүҙә, популярлаштырыуҙа яңы формалар күҙаллай.

3. Башҡортостан Республикаһының милли-мәҙәни мөхитендә Digital-стратегия: Башҡортостандың милли-мәҙәни мираҫы тураһында ҙур күләмле мәғлүмәт тупланған интернет-порталдар булдырыу (виртуаль музейҙар, мәғлүмәт алмашыу мөхите, милли-мәҙәни ҡомартҡылар һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тергеҙеү һәм яңыртыу һ.б.)
4. башҡорт халҡының тарихын, этнографияһын, археологияһын өйрәнгәндә заманса дисциплина-ара фәнни ысулдар ҡулланыуға ярҙам күрһәтеү.

Шул уҡ ваҡытта Стратегияны тормошҡа ашырыуҙа тел өлкәһенә лә ҙур иғтибар бүленә. Башҡортостандың дәүләт телдәре – рус һәм башҡорт телдәре. Башҡорт мәҙәниәте һәм теле, рус мәҙәниәте һәм теле кеүек үк, Башҡортостан Республикаһының барлыҡ халыҡтары өсөн милли-мәҙәни ресурс булып тора.

Рус теле Башҡортостан Республикаһында дәүләт теле һәм милләт-ара аралашыу теле булап тора. Әммә Башҡортостан башҡорт теленең барлыҡҡа килеү һәм үҫешеү урыны, шуға күрә республикаға, башҡорт халҡы өсөн туған тел һәм Башҡортостан Республикаһы өсөн дәүләт теле булараҡ, башҡорт теленә һәр яҡлап ярҙам итеү бурысы йөкмәтелә.

Был юҫыҡта түбәндәге йүнәлештәрҙе үҫтереү зарур:

а) башҡорт телен технологиялаштырыу (машина фондын камиллаштырыу, кәрәкле программалар һәм электрон ҡушымталар һ.б. эшләү);
б) Башҡортостан Республикаһында башҡорт мәҙәни-тел мөхитен үҫтереүҙе һәм киңәйтеүҙе күҙаллаған визуаль, кинестетик контентты һәм продукцияны үҫтереү (кино, телевидение, йәнһүрәттәр, үҫтереүсе уйындар, баҫма продукция һ.б.);
в) мәктәпкәсә һәм урта дөйөм, шулай уҡ өҫтәмә белем биреү учреждениелары өсөн башҡорт телен өйрәнеү буйынса уҡытыу программаларын эшләү һәм камиллаштырыу;
г) ғәмәлдәге милли дөйөм белем биреү учреждениеларын (мәктәптәр, гимназиялар, лицейҙар) һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереүҙе иҫәпкә алып, «Башҡортостан Республикаһында милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы»н эшләү һәм тормошҡа ашырыу;
д) башҡорт халҡының тарихи-әҙәби мираҫын һаҡлау, өйрәнеү һәм популярлаштырыу;
е) башҡорт телендә заманса (хәҙерге) әҙәбиәтте үҫтереүҙә ярҙам күрһәтеү;
ж) башҡорт тел ғилеме һәм әҙәбиәт ғилеме өлкәһендәге фәнни тикшеренеүҙәргә ярҙам күрһәтеү.

## IV. Стратегияның төп индикаторҙары, күрһәткестәре һәм уны тормошҡа ашырыуҙан көтөлгән һөҙөмтәләр

Стратегияны тормошҡа ашырыу һөҙөмтәләрен баһалау түбәндәге индикатор һәм күрһәткестәрҙәге үҙгәрештәрҙе анализлау нигеҙендә мөмкин:

– башҡорт халҡының тормош кимәле күтәрелеүе;
– Башҡортостан Республикаһының инвестиция рейтингы күтәрелеүе;
– башҡорт халҡының милли үҙенсәлеге нығыныуы;
– йәмғиәттә низағтар кимәле кәмеүе;
– дәүләт власы органдарына ышаныс кимәле артыуы;
– юғары белемле һәм ғилми дәрәжәле, шул иҫәптән юғары технологик һөнәрҙәр өлкәһендә башҡорт белгестәре һаны артыуы;
– эшҡыуарлыҡта, IT-тармаҡта һәм идара итеү вазифаларында башҡорттар һаны артыуы;
– башҡорт медиа киңлегенең дөйөм күләме артыуы.

Дөйөм алғанда, әлеге Стратегияны торомошҡа ашырыу түбәндәге һөҙөмтәләргә ирешеүгә йүнәлтелә:

– Башҡортостан Республикаһында һәм унан ситтә башҡорт халҡының үҙенсәлеген һаҡлауға йүнәлтелгән ойоштороу, хоҡуҡи, мәғариф, мәғрифәт, мәҙәни, матди, фәнни һәм методик сараларҙың берҙәм системаһын булдырыу, уның этномәҙәни үҫешен үҫтереү һәм модернизациялау;
– шовинизм һәм этник-ара низағтарҙы иҫкәртеүгә йүнәлтелгән саралар комплексын тормошҡа ашырыу;
– йәмғиәттәге социаль көсөргәнеште кәметеү, халыҡтың социаль хәл торошоноң ыңғай яҡҡа үҙгәреүе;
– башҡорт халҡының үҙенсәлекле мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү;
– Башҡортостан Республикаһының инвестиция йәлеп итеүсәнлеген арттырыу.

Стратегия нигеҙендә атап үтелгән һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн тотош республикала тотороҡло, берҙәм, шул уҡ ваҡытта полиэтник йәмғиәт төҙөү шарттарында был документта башҡорт мәҙәниәтен, телен үҫтереү өсөн күрһәтелгән нюанстарҙы иҫәпкә алып Башҡортостан Республикаһының дәүләт милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыуҙың Республика программаһын ҡабул итеүҙе һәм раҫлауҙы күҙаллай.

**Ҡушымта**

## Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын бойомға ашырыу планы

| | Йүнәлештәр | Маҡсаттар | Бурыстар | Стратегик башланғыстар | Башҡарыусылар |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | **Башҡорт халҡының демографик үҫешенә булышлыҡ итеү** | Башҡорт ғаиләһе традициялары мәҙәни мөхитен үҫтереүгә һәм күп балалы ғаиләләргә ярҙам итеү | Традицион ғаилә ҡиммәттәрен, башҡорт ғаиләһе культын яҡлау | "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" асыҡ республика конкурсы | БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Башҡорт ғаиләһе этнографияһы, демографияһы, социологияһы өлкәһендә ғилми тикшеренеүҙәр | БР Фәндәр академияһы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты |
| | | | | Башҡорт ғаиләһен популярлаштырыусы йәмәғәт проекттарына ярҙам | БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы, БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Матбуғат һәм киң |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | мәғлүмәт саралары агентлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Башҡорт ғаиләһе культын үҫтереүгә йүнәлтелгән киң мәҙәни система булдырыу | БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Диниә назараты, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Никах-туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен үҫтереү | «Яусы» дөйөм милли системаһын булдырыу һәм уның эшен көйләү | Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, йәмәғәт ойошмалары, БР Диниә назараты |
| 2 | **Балалар өсөн башҡорт мәҙәни һәм эстетик мөхитен булдырыу** | 0-дән 6-7 йәшкәсә балалар өсөн башҡортса ҡулайлы мәҙәни мөхит булдырыу | Башҡорт теленән башланғыс белем күнекмәләрен биреү | Башҡортса кинестетик уйын һәм уйынсыҡтар сығарыу | БР Граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Балалар өсөн аудиовизуаль контентты мәғлүмәтләштереү:<br>- балалар өсөн онлайн-уйындар,<br>-балалар контенты өсөн мәғлүмәт базалары һәм программалар тәьминиәтен (Android, IOS) булдырыу | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Визуаль контент төшөрөү:<br>-мультипликация (шул иҫәптән, тәржемәле йәнһүрәттәр);<br>-сифатлы видео-контент булдырыу, балалар өсөн башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәре буйынса, башҡорт теле диалекттарын файҙаланып төшөрөлгән фильмдар конкурсы ойоштороу;<br>- балалар араһында влогер һәм стримерҙар конкурсы үткәреү | |
| | | | Баланы логопедик, фонетик, психологик яҡтан башҡорт мөхитендә аралашыуға әҙерләү | Мәктәпкәсә белем биреү ойошмалары өсөн тел буйынса күп кимәлле уҡытыу курсын булдырыу | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Балалар өсөн заманса художестволы образдар уйлап табыу | БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, БР Яҙыусылар союзы, БР Кинематографистар союзы, киң мәғлүмәт саралары |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Башҡорт теле буйынса логопедтар әҙерләү | М.Аҡмулла исемендәге БДПУ |
| | | | Ғаиләлә башҡорт мәҙәни мөхитен булдырыу өсөн ата-әсәләрҙе әҙерләү һәм уҡытыу | -Ғаиләлә башҡорт теле мөхитен булдырыу буйынса ата-әсәләр өсөн махсус курстар ойоштороу;<br>- ата-әсәләр өсөн оҫталыҡ дәрестәре ойоштороу, уларҙы телевидениела, социаль селтәрҙәрҙә һәм киң мәғлүмәт сараларында таратыу | БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, БР «Башҡортостан» ТРК ДУП (БСТ, «Тамыр»), Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Талантлы балаларҙы асыҡлау, уларҙың үҫешенә ярҙам итеү, балаларҙа эстетик зауыҡ тәрбиәләү | Дөйөм белем биреү өлкәһендә башҡорт гимназияларын тармаҡтар буйынса махсуслаштырыу (мәҫәлән: математика, физика, химия, гуманитар йүнәлеш һ.б.) | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, йәмәғәт ойошмалары |
| 3 | **Балалар, үҫмерҙәр, йәштәр өсөн башҡорт мөхитен булдырыу** | 8-19 йәшлек балалар һәм үҫмерҙәрҙе башҡорт мәҙәни мөхитенә йәлеп итеү өсөн ҡулайлы шарттар булдырыу | Сығарылыш уҡыусылары араһында өмөтлө йәштәрҙе асыҡлау, юғары уҡыу йорттарына маҡсатлы йүнәлтеү | Рәсәйҙең, Башҡортостандың иң яҡшы педагогтарын йәлеп итеп башҡорт телен тәрән өйрәнгән уҡыусылар өсөн химия, биология, физика, математика буйынса Берҙәм дәүләт имтиханына профилле әҙерлек курстарын үҙ эсенә алған йәйге лагерҙар ойоштороу | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, инвесторҙар |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Башҡорт гимназияларында, башҡорт телен өйрәнеү буйынса профилле лагерҙарҙа һөнәри йүнәлеш биреү эшен алып барыу | БР Мәғариф һәм фән министрлығы |
| | | | Башҡорт гимназияларында махсус аралашыу мөхитен булдырыу | Башҡорт гимназиялары консорциумын ойоштороу | БР Мәғариф һәм фән министрлығы |
| | | | | Уҡыусылар һәм уҡытыусылар кимәлендә гимназия-ара бәйләнеш (чемпионат, конкурс, олимпиада, ағартыу һәм күңел асыу саралары һ.б.) | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Башҡорт үҫмерҙәрендә үҙаллылыҡ һәм бер-береңә ярҙам итеү сифатын тәрбиәләү | Традицион башҡорт уйындары нигеҙендә тимбилдинг программаларын булдырыу, уларҙы лагерь һәм гимназияларҙа таратыу | БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Үҫмерҙәрҙә башҡорт милли мәҙәниәтенә ҡарата ғорурлыҡ тойғоһон уятыу | Интернет селтәрендә, офлайн-режимда күп милләтле аудиторияға йүнәлтелгән, башҡорт колоритлы аралашыу майҙансыҡтары ойоштороу: «Асыҡ донъя» рәүешендәге интерактив уйындар, тестар һ.б. | БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Мәғариф һәм фән министрлығы, БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Йәштәр өсөн формаль булмаған мөхиттә аралашыу һәм ижади төркөмдәр (рэп-, рок- башҡарыусылар һ.б.) өсөн сығыш яһау майҙансыҡтарын булдырыу (клуб, дискотека һ.б.) | |
| | | | Башҡорт спорт берлектәре үҫешенә ярҙам итеү | Традицион спорт төрҙәренең өҫтөнлөклө исемлеген төҙөү | БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Традицион һәм Олимпия төрҙәренә ҡарамаған спорт төрҙәре үҫеше өсөн майҙансыҡ һәм базалар ойоштороу | |
| | | | | БР муниципаль берәмектәрендә традицион спорт төрҙәре буйынса секциялар асыу | |
| | | | | Традицион спорт төрҙәре буйынса рәсми чемпионаттар ойоштороу (алыш, уҡтан атыу, команда уйындары (Ылаҡ, һ.б.) | |
| 4 | **Башҡорт студент йәштәре берләшмәләре** | Студент йәштәр араһында Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлдә башҡорт мәҙәни мөхитен формалаштырыу өсөн шарттар булдырыу | Йәштәр өсөн башҡортса мәҙәни-мәғлүмәти аралашыу мөхитен булдырыу | Башҡорт йәштәре күпләп уҡыған юғары уҡыу йорттарындағы студенттарҙы туплаған уртаҡ берләшмә ойоштороу (Мәскәү, Санкт-Петербург, Силәбе, Ҡазан, | Мәскәү һәм Санкт-Петербург аспиранттары һәм студенттары ассоциацияһы, Башҡорттарың |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Екатеринбург, Пермь, Һамар, Һарытау, Ырымбур, Европа һәм Азия университеттары), Рәсәйҙең төрлө ҡалаларында саралар үткәреү системаһын булдырыу (һабантуй, чемпионат, форум, тәбиғәткә сығыу һ.б.) | федераль милли-мәҙәни автономияһы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Башҡорт йәштәрендә үҙаллылыҡ һәм бер-береңә ярҙам итеү сифатын тәрбиәләү | Башҡортостан һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге юғары, урта белем биреү ойошмаларына уҡырға ингән студенттарға ярҙам (тәү сиратта, дөйөм ятаҡта йәшәүсе ҡыҙҙарға); -тимбилдинг программаларын булдырыу, уларҙы берләшмә системаһына, уның сараларына йәлеп итеү, интеллектуаль элита менән бәйләнеште нығытыу | Мәскәү һәм Санкт-Петербург аспиранттары һәм студенттары ассоциацияһы, БР йәш яҡташтар ассоциацияһы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Студенттар араһында талантлы йәштәрҙе асыҡлау һәм уларҙы профессиональ яҡтан әҙерләү | - Башҡортостан юғары уҡыу йорттарында бакалавриат һәм магистратурала талантлы йәштәр өсөн бюджет урындарын квоталау; - йәш белгестәр өсөн | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Мәскәү һәм Санкт-Петербург аспиранттары һәм студенттары ассоциацияһы, Бөтә |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | стажировкалар ойоштороу; -аспирантура һәм докторантура | донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| 5 | **Башҡорт эшҡыуарҙары берләшмәһе** | Эшҡыуарҙарҙың үҙ-ара ярҙам мөхитен булдырыу, бизнес берләшмәләре тарафынан башҡорт мәҙәни проекттарына ярҙам системаһын ойоштороу | Эшҡыуарҙарҙы башҡорт халҡы үҫеше йүнәлештәре сиктәрендә гуманитар проекттарҙы бойомға ашырыуға йәлеп итеү | Башҡорт милли мәҙәниәте үҫешенә йүнәлтелгән инвестиция һәм иғәнәләр менән эшләүсе яңы фонд төҙөү йәки эшләп килеүсе фондтың маҡсаттарын камиллаштырыу | БР Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты, БР Мәҙәниәт министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Башҡорт эшҡыуарҙарының аралашыу, үҙ-ара ярҙам системаһын булдырыу | Даими эшлекле осрашыуҙар һәм саралар ойоштороу майҙансығын булдырыу | Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Туризм өлкәһендә эш итеү | Туризм өлкәһендә башҡорт эшҡыуарлығын үҫтереү программаһын ойоштороу, уны төбәк һәм федераль махсус программалар аша бойомға ашырыу | БР Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Рәсми вәкилдәр өсөн тәғәйенләнгән эшлекле киске аш һәм банкеттар ойошторғанда башҡорт милли аш-һыуына өҫтөнлөк биреү | Төбәк башҡарма власть органдары, МР һәм ҠО хакимиәттәре |
| | | | | Башҡорт милли брендтары иҫәбенә ингән продукция сифатын күҙәтеү (ҡымыҙ, бал, ҡаҙы, ҡаҙылыҡ, хәләл | БР Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты, БР Диниә назараты, Бөтә донъя |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | продукция һ.б.) | башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Яңы эш башлаусы эшҡыуарҙарға, стартаперҙарға ярҙам | Муниципаль берәмектәрҙә бизнес-проекттарҙы үҫтерергә өйрәтеү, өмөтлө эшҡыуар һәм бизнес-проекттарҙы асыҡлауға йүнәлтелгән майҙансыҡтар булдырыу | БР Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты, МР һәм ҠО хакимиәттәре, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| 6 | **Башҡорт уҡытыусылары һәм педагогтары берләшмәһе** | Башҡорт төркөмдәрендә, мәктәпкәсә белем биреү, дөйөм белем биреү ойошмаларында тәрбиәсе, уҡытыусы, педагогтарҙың башҡорт теле, әҙәбиәте, тарихы һәм мәҙәниәтен уҡытыуҙа функциональ ролен үҫтереү | Башҡорт теле, әҙәбиәте, тарихы һәм мәҙәниәтен уҡытыу буйынса ғәмәлдәге хәлде даими күҙәтеү | Башҡорт теле, әҙәбиәте, тарихы һәм мәҙәниәтен уҡытыуҙың проблемалы аспекттарына арналған махсус семинарҙар, секциялар, конференциялар ойоштороу | БР Фәндәр академияһы, БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Башҡорт, рус (туған) һәм башҡа Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының туған телдәре уҡытыусылары Ассоциацияһы эшмәкәрлеген үҫтереү, был ойошмаға Рәсәй төбәктәрендәге башҡорт теле уҡытыусыларын ағзалыҡҡа алыу | БР Мәғариф һәм фән министрлығы |
| | | | Мотлаҡ белем биреү системаһында уҡытыу | Башланғыс, урта һәм дөйөм белем биреү | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | программаларын үҫтереүгә ғәмәли ҡараш формалаштырыу | программаларын төҙөгәндә дәүләт власы органдары менән берлектә эш итеү | донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Башҡорт гимназиялары консорциумын төҙөү | |
| | | | Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын урта белем биреү системаһына индереү идеяһын алға әйҙәү | Пермь крайы һәм Свердловск өлкәһе мәғариф учреждениеларында башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын өйрәнеү буйынса эш алып барыу | БР Мәғариф һәм фән министрлығы |
| | | | Уҡытыусыларға методик ярҙам | Уҡытыусыларҙы күп төрлө методик материалдар менән тәьмин итеү | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Өҫтәмә белем биреү системаһын үҫтереүҙә ғәмәли ҡараш формалаштырыу | Өҫтәмә белем биреү программаларын ерле тарихи, мәҙәни үҙенсәлектәрҙе күҙ уңында тотоп, башҡарма власть органдары, йәмәғәт ойошмалары менән берлектә төҙөү (мәктәптәрҙә шәжәрә төҙөү, уҡыусыларҙың реконструкторҙар клубын булдырыу һ.б.) | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Талантлы балалар һәм үҫмерҙәрҙе асыҡлау буйынса күп кимәлле программа булдырыу һәм уларҙың һәләттәрен мәғариф лагерҙарында үҫтереү | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| 7 | **Өҫтөнлөклө проекттар сиктәрендә урындағы йәмғәт ойошмалары һәм интеллигенция берләшмәһе** | БР муниципаль берәмектәре кимәлендә төбәктәр һәм әүҙем йәмғәтселектең бәйләнешен нығытыу | Мәҙәни һәм йәмғәт киңлектәрен формалаштырыуҙа инициативалы берләшмәләргә ярҙам | - Башҡорт ырыуҙары хәрәкәте (башҡорт ырыуҙары съездарын, башҡорт ырыуҙары парадын даими ойоштороу);<br>- «Шәжәрә байрамы» кеүек сараларҙы артабан дауам итеү | БР Мәҙәниәт министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, МР һәм ҠО хакимиәттәре |
| | | | | Дини белем биреүҙе үҫтереү:<br>- дини белем биреүсе уҡыу йорттарын арттырыу (университет, мәҙрәсә, йәкшәмбе мәктәптәре);<br>- башҡорт телендә методик, уҡыу әсбаптары, дәреслектәр әҙерләү һәм баҫтырыу | Рәсәй мосолмандары Үҙәк Диниә назараты, Башҡортостан Диниә назараты, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ |
| | | | | «Һабантуй» халыҡ байрамын яңы форматта ойоштороу | БР Туризм буйынса дәүләт комитеты, БР |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты, БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, МР һәм ҠО хакимиәттәре |
| | | | | «Айыҡ ауыл» проектын дауам итеү | БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, МР һәм ҠО хакимиәттәре, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы |
| | | | | Башҡортостанда юл буйы сервисын үҫтереүгә булышлыҡ итеү | БР Иҡтисад министрлығы, БР Туризм буйынса дәүләт комитеты, БР Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты, МР һәм ҠО хакимиәттәре, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | БР һәм Рәсәйҙең башҡорттар йәшәгән төбәктәрендә урындағы инициативаларҙы бойомға ашырыуҙа ярҙам итеү | БР Финанс министрлығы, БР Фәндәр академияһы, МР һәм ҠО хакимиәттәре, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Төнъяҡ-көнбайыш башҡорттарын берләштереүгә һәм ойоштороуға йүнәлтелгән проекттарҙы үҫтереү | Төнъяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәренең лексик-семантик һәм акустик-интонацион торошон өйрәнеү<br><br>Төнъяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәренең фонетик һәм грамматик законлыҡтарын топонимик һәм яҙма ҡомартҡылар нигеҙендә диахроник (19-сы быуаттың 30-сы йылдарына тиклем) рәүештә реконструкциялау. Шул һөҙөмтәлә алынған мәғлүмәттәрҙе халыҡ араһында таратыу.<br><br>Төньяҡ-көнбайыш, көньяҡ һәм көнсығыш башҡорттарының фольлор материалдарын сағыштырып өйрәнеү.<br>Шул һөҙөмтәлә алынған мәғлүмәттәрҙе халыҡ араһында таратыу. | РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, БДУ, БР Фәндәр академияһы, М.Аҡмулла ис. БДПУ, БР Милли архивы ДҠУ |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәрен ҡулланыусыларҙың милли үҙбилдәләнеш торошон өйрәнеү | |
| 8 | **Мәҙәниәт-ара аралашыу һәм башҡорт милли мәҙәниәте тураһында ҡараштар формалаштырыу буйынса башҡорт интеллектуаль элитаһы берләшмәһе** | Халыҡ-ара һәм федераль кимәлдә башҡорт милли мәҙәниәтенең статус-роль кимәлен күтәреү һәм интеграциялау | Ижтимағи, ижтимағи-сәйәси процесстарҙа башҡорт интеллигенцияһының ролен күтәреү | Мәғлүмәт, мәғрифәт, фәнни-публицистик ресурстарҙы үҫтереү (тарих һәм сәйәсәт буйынса видео-блогтар, популяр уҡытыу курстары, йәмәғәт фекере лидерҙарының социаль селтәрҙәрҙә аккаунттарын үҫтереү) | Фәнни һәм ижади интеллигенция, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, Башҡорттарың федераль милли-мәҙәни автономияһы |
| | | | | Интеллектуаль элита вәкилдәренә үҙ-ара эш итеү өсөн махсуслаштырылған дисциплина-ара майҙансыҡтар төҙөү | Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, БР Фәндәр академияһы, ижади союздар |
| | | | Башҡорт рухиәтен һәм милли мәҙәниәтен өйрәнеү һәм аңлап ҡабул итеү | Дисциплина-ара тикшеренеүҙәр ойштороу: археология, этнология, тарих, тел, әҙәбиәт ғилеме, фольклористика | БР Фәндәр академияһы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Башҡортостандың археологик мираҫын һаҡлау, популярлаштырыу һәм баҫтырып сығарыу | РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | *(выпуск серии монографий с публикациями археологических материалов Южного Урала различных периодов)* | |
| | | | | Башҡорт мәғрифәтселәренең дини-фәлсәфәүи мираҫын өйрәнеү (Р.Фәхретдинов, З.Рәсүлев, М. Рәмзи, Ғ. Соҡорой һ.б.) | БДУ, БР Фәндәр академияһы, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты |
| | | | | Башҡорт кинематографияһын үҫтереү:<br>- киностудия һәм киномәктәптәр селтәрен булдырыу;<br>- даими кинофестивалдәр ойоштороу;<br>-башҡортса кинофильмдар күләмен артырыу | БР Мәҙәниәт министрлығы, ижади союздар |
| | | | | Тарихи реконструкцияны үҫтереү (кейем, көнкүреш, ҡорал һ.б.), уны дизайнер сәнғәтендә ҡулланыу | Ижади союздар |
| | | | | Һынлы сәнғәтте үҫтереү (скульптура, каллиграфия һ.б.) | БР Мәҙәниәт министрлығы, ижади союздар |
| | | | | Башҡорт театр сәнғәтен үҫтереү | БР Мәҙәниәт министрлығы, ижади |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | союздар |
| | | | | Формаль булмаған һәм альтернатив сәнғәт төрҙәрен үҫтереү (рэп, рок һ.б.) | Ижади союздар |
| | | | | Поэтик һәм әҙәби образдарҙы үҫтереү<br>Төньяҡ-көнбайыш районларҙан сыҡҡан яҙыусы һәм журналистарҙың ижадын, уларҙың берҙәм башҡорт этносын берләштереүгә индергән өлөшөн өйрәнеү | БР Яҙыусылар союзы, ижади союздар, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты |
| | | | | Башҡорт матбуғатын үҫтереү:<br>- башҡорт телендә сыҡҡан баҫма матбуғатҡа ярҙам;<br>- телевидениела башҡорт телендәге яңылыҡтар, аналитик һәм мәғариф-ағартыу тапшырыуҙарына, шулай уҡ башҡорт тарихы һәм мәҙәниәтенә арналған тапшырыуҙарға ярҙам;<br>- ике телле белгестәр әҙерләү | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, БДУ |
| | | | | Башҡорт матбуғатын үҫтереү: ике телле белгестәр әҙерләү | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | агентлығы, Башҡорт дәүләт университеты |
| | | | Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлдәге мәҙәни коммуникатив киңлеккә сығыу | Туған телдәрҙе һәм мәҙәниәтте һаҡлау буйынса халыҡ-ара кимәлдә (ЮНЕСКО, Рәсәй халыҡтары ассамблеяһы һ.б.) эксперттар менән хеҙмәттәшлек итеү, башҡа ил һәм төбәктәрҙең уңышлы тәжрибәһен үҙләштереү | БР Фәндәр академияһы, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәге, БР Мәҙәниәт министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Юғары мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһенә интеграция (халыҡ-ара кимәлдәге конкурс, фестивалдәрҙә ҡатнашыу) | БР Мәҙәниәт министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Урта мәктәптәр өсөн федераль мәғариф стандарттарына башҡорт тарихы һәм мәҙәниәте сюжеттарын индереү Встраивание в тренды современной гуманитарной науки (совместные научные мероприятия, научные труды и тд.) | БР Фәндәр академияһы, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | | Гуманитар фәндәрҙең заманса йүнәлештәренә ҡушылыу (берлектәге фәнни саралар, фәнни хеҙмәттәр | БР Фәндәр академияһы, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәге |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | һ.б.) | |
| | | | | 12 томлыҡ "Башҡорт халыҡ ижады" хеҙмәтен рус телендә ҡабатлап баҫтырыу<br><br>Тарихи карталар һәм документтар нигеҙендә Башҡортостан ерҙәре топонимдарының диахроник һүҙлеген төҙөү, онотолоп ҡалған ер-һыу атамаларын тергеҙеү<br><br>Башҡорт антропонимдарының тарихи һүҙлеген эшләү<br><br>Башҡорт фольклорының башҡортса-русса аңлатмалы һүҙлеген эшләү | РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәге |
| | | | Башҡорт телен һәм гуманитар ғилемде һанлаштырыу | Башҡорт теленең милли корпусын, электрон һүҙлектәр ойоштороуға ярҙам итеү һәм үҫтереү, телмәр анализаторын һәм синтезаторын эшләү | БР Фәндәр академияһы, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәге, БР Милли архивы |
| | | | | Башҡорт корпусының ғәмәли мөмкинлектәрен киңәйтеү (бирелгән параметрҙар буйынса эҙләүҙең функциональ мөмкинлеген тәрәнәйтеү), корпус күләмен | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | арттырыу;<br>төрлө жанр, стиль, автор текстарын пропорциональ индереү иҫәбенә корпустың реперезентативлығын тәьмин итеү.<br>Корпуслы лингвистика өлкәһендә ғилми тикшеренеүҙәр | |
| | | | | Шәжәрә төҙөү һәм тыуған яҡты өйрәнеү өсөн электрон база һәм программа тәьминәтен эшләү | |
| | | | | Википедия һәм уға оҡшаш мәғлүмәт системаларын үҫтереү | Башҡорт Википедияһы |
| | | | Халыҡ-ара, Рәсәй кимәлендә мәғәнәүи ҡараш, коммуникатив мөхит һәм дискурстар формалаштырыуҙа лидерлыҡ һәм новаторлыҡ | Интеллектуаль мөхиттә концептуаль хәрәкәттәргә ярҙам итеү (евразиялылыҡ, Рәсәй төркиҙәре). Ғалимдар менән халыҡ-ара кимәлдә хеҙмәттәшлек итеү | БР Фәндәр академияһы, БР халыҡтары ассамблеяһы, Башҡорттарҙың федераль милли-мәҙәни автономияһы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәге |
| 9 | **Халык-ара һәм** | Аҫаба башҡорттар һәм | Рәсәй төбәктәрендә йәшәүсе | Рәсәй Федерацияһы | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | **төбәк-ара кимәлдә башҡорт берләшмәләре** | башҡорт диаспоралары араһындағы бәйләнешкә булышлыҡ итеү | башҡорттарҙың аҫаба халыҡ булыуҙарын аңлауҙы нығытыу | субъекттарындағы белем биреү ойошмаларында башҡорт телен, башҡорт халҡының мәҙәниәте һәм тарихын уҡытыуға ярҙам күрһәтеү, шул иҫәптән яңы башҡорт кластарын асыу | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Башҡорттарҙың федераль милли-мәҙәни автономияһы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, РФ субъекттарында эшләүсе башҡорт йәмәғәт ойошмалары |
| | | | | Рәсәй Федерацияһы субъекттарынан балаларҙы башҡорт телен, башҡорт халҡының мәҙәниәте һәм тарихын өйрәнеүсе профилле лагерҙарға йәлеп итеү | |
| | | | | Рәсәй төбәктәре дөйөм белем биреү мәғариф ойошмаларында башҡорт теле һәм мәҙәниәтен өйрәнеүгә ярҙам итеү | |
| | | | | Рәсәй төбәктәрендә системалы ағартыу эшен алып барыу:<br>- китап, брошюра, журналдар һ.б.сығарыу;<br>-махсус теле-, радиотапшырыуҙар, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында айырым тапшырыу әҙерләү, китап, брошюралар сығарыу, ғилми | БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Фәндәр академияһы, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәге |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | тикшеренеүҙәр үткәреү | |
| | | | | Рәсәй, халыҡ-ара кимәлдә бергә эшләүсе үҙ аллы мәғлүмәт каналдарын булдырыу ( Силәбе, Ырымбур, Пермь крайы Барҙы ауылы) | Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, РФ субъекттарында эшләүсе башҡорт йәмәғәт ойошмалары |
| | | | | Халыҡҡа әҙер материалдарҙы даими еткереү буйынса тарихи-мәҙәни үҙәктәр менән даими хеҙмәттәшлек итеү (китап, брошюралар таратыу, саралар уҙғарыу) | БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Мәғариф һәм фән министрлығы, БР Фәндәр академияһы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, РФ субъекттарында эшләүсе башҡорт йәмәғәт ойошмалары |
| | | | Тарихи-мәҙәни үҙәктәр хеҙмәткәрҙәре, әүҙем йәмәғәтселәр менән системалы эшләү | Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, тарихи-мәҙәни үҙәктәр вәкилдәрен мәҙәниәт өлкәһендә менеджмент, социаль селтәрҙәрҙә һәм рәсми мәғлүмәт сараларында эш, власть органдары менән аралашыу үҙенсәлектәре һ.б. йүнәлештәр буйынса даими уҡытыуҙар ойоштороу. | БР Мәҙәниәт министрлығы, БР Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге буйынса дәүләт комитеты, БР Фәндәр академияһы |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | Дөйөм башҡорт мәғлүмәт киңлегенә башҡорт диаспораларын интеграциялау | Диаспоралар менән халыҡ-ара кимәлдә эшләү ( даими рәүештә Шәжәрә байрамы, һабантуйҙар, фәнни-ағартыу сараларын ойоштороу(конференциялар, лекциялар, түңәрәк өҫтәлдәр)), шул иҫәптән, медиаресурстар менән ярҙам итеү | БР Мәҙәниәт министрлығы, БР матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, БР Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге буйынса дәүләт комитеты, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы |
| | | | Башҡорттарҙы Башҡортостан Республикаһына ҡайтарыу өсөн шарттар тыуҙырыу | Рәсәй Федерацияһы субъекттарынан балаларҙы Башҡортостан Республикаһының инновацион дөйөм белем биреү ойошмаларына йәлеп итеү ; | Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы, БР Мәғариф һәм фән министрлығы |
| | | | | - Эшкә урынлашыуҙа ярҙам (эш урындары базаһын төҙөү, потенциаль эш биреүселәр менән бәйләнеш урынлаштырыу һ.б.);<br>- республиканың юғары һәм урта махсус белем биреү ойошмаларына уҡырға инеү өсөн мәғлүмәти һәм реаль | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | ярҙам;- Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы эргәһендә Башҡортостанға күсеп ҡайтырға теләүселәр менән эшләү өсөн махсус комиссия төҙөү («Тыуған яҡ»);- республикаға күсеп ҡайтырға теләүселәрҙе миграция ҡануниәте, РФ гражданлығын алыу процедураһы һәм башҡа һорауҙар буйынса мәғлүмәт менән тәьмин итеү | |
| 10 | **Башҡорт халҡын хоҡуки тәьмин итеү** | | Гражданлыҡ хоҡуҡтарын яҡлау | Башҡорт халҡының экология өлкәһендә хоҡуҡтарын яҡлау | БР Экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, хоҡуҡ яҡлау ойошмалары |
| | | | | Башҡорт телен өйрәнеү һәм башҡортса белем алыу хоҡуҡтарын яҡлау | БР Мәғариф һәм фән министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, хоҡуҡ яҡлау ойошмалары |
| | | | | Хеҙмәт мигранттары (вахтасылар) хоҡуҡтарын яҡлау | БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы, |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, хоҡуҡ яҡлау ойошмалары |
| | | | Башҡорт халҡының рухи мираҫын яҡлау | Башҡорт халҡының символ һәм брендтарына хоҡуҡты рәсми теркәү (төбәк брендтары, ЮНЕСКО исемлегенә индереү, ырыу тамғаларын һәм гербтарын теркәү һ.б.) | БР мәҙәниәт министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, БР Дәүләт йыйылышы-Ҡоролтайы, БР Фәндәр академияһы |
| | | | Башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ ҡулланышын киңәйтеү | Тарихи факттарҙы боҙоп күрһәтеүгә ҡаршы көрәш (ағартыу хәрәкәтен башлау: мәҫәлән, Заман, Ғалимдар мифтарға ҡаршы, Заманса ҡарашлы фән һ.б.) | БР Хөкүмәте, МР һәм ҠО хакимиәттәре, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, БР Фәндәр академияһы, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ, йәмәғәт фондтары, йәмәғәт ойошмалары, РФА Өфө федераль тикшеренеү үҙәге |
| | | | | БР Хөкүмәте, МР һәм ҠО эргәһендәге терминология комиссияларының эшмәкәрлеген яйға һалыу, неологизмдар буйынса республика комиссияһын булдырыу | |
| | | | | Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәрҙең, дәүләт хеҙмәтен күрһәтеүсе, шулай уҡ халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеү ойошмалары хеҙмәткәрҙәре | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | өсөн башҡорт телен белеү буйынса минималь талаптар билдәләү (башҡорт теленең эшлекле минимумы) | |
| | | | | Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәр, дәүләт һәм муниципаль хеҙмәт күрһәтеүсе ойошма хеҙмәткәрҙәренең дәүләт телдәрен белеү кимәлен баһалау | |
| | | | | Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәр өсөн БР дәүләт телдәрен өйрәтеү инфраструктураһын булдырыу, уҡытыу процессын дәртләндереү, БР дәүләт телдәрен ҡулланыу дәрәжәһен арттырыу, даирәһен киңәйтеү | |